✓ *Ахмаҡ һәм наҙан бәндәне ошо биш сифат аша танып була: ул сәбәпһеҙгә асыулана, урынһыҙ ерҙә һүҙ һөйләй, үҙенә ҡағылмаған эшкә ҡыҫыла, әленән-әле фекерен үҙгәртә, уға кем яуызлыҡ, кем изгелек теләгәнен дә айыра алмай.*

*(Г. Честертон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№14 (536)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эфиопияла - Өфө ҡалаһы...**

Иранда - Салауат ауылы



5

**Үҙебеҙҙе хөрмәт итәбеҙ -**

туған телебеҙҙә һөйләшәбеҙ



6,11

**Тәжрибә туплағандан һуң...**

тыуған яҡтарға ҡайтасаҡмын



8-9

**Ҡояш кеүек булайыҡ!**



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Үҙебеҙҙә етештерелгәнгә етмәй инде..." тигән ҡағиҙәне һаңға һуғырға ваҡыттыр, тибеҙ...

***Зөлфиә ИШБУЛАТОВА, Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыу баҙары идаралығы начальнигы урынбаҫары:*** Республикабыҙ тауар етештереүселәре мәнфәғәтен ҡайғыртыу мәсьәләһе һәр дайым өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булып килә. Ауыл хужалығы предприятиеларына ярҙам йөҙөнән һәм ҡала халҡын етештереүселәр продукцияһы менән туранан-тура тәьмин итеү маҡсатында былтыр 319 ауыл хужалығы йәрминкәһе үткәрелде. Ваҡлап һатыу баҙарҙарында һәм сауҙа комплекстарында 800-ҙән ашыу сауҙа итеү урыны, ҡала урамдарында йорт яны участкаларында үҫтерелгәнде һатыу өсөн 200-ҙән ашыу сауҙа урынлы 7 йыһазландырылған сауҙа майҙансығы булдырылды. Шулай уҡ тауар етештереүселәрҙең махсуслаштырылған машиналарынан һатыу итеү өсөн дә урындар билдәләнгән.

2011 йылдан алып Өфө ҡала округы хакимиәте ҡатнашлығында Башҡортостан Сауҙа ассоциацияһы башланғысы менән "Үҙеңдекен һайла - үҙеңдекен һатып ал!" тип аталған акция бара. Бөгөн унда "Байрам","Матрица", "Полушка","Йәрминкә" кеүек эре республика сауҙа үҙәктәре, йөҙләгән магазин, ваҡлап һатыу баҙарҙары, сауҙа-хеҙмәтләндереү комплекстары ҡатнаша. Акцияла ҡатнашыусы социаль әһәмиәттәге тауарҙар исемлегенә 200-ҙән ашыу атама индерелгән, уларҙың бөтәһенә лә "Башҡортостан тауары" тамғаһы һуғылып, айырым хаҡ күрһәткестәре ҡуйыласаҡ. Был акция республикабыҙҙа етештерелгән тауарҙарға ҡулланыусы иғтибарын йәлеп итеү, магазин кәштәләрендә уларҙың шунда уҡ күҙгә ташланып тороуы маҡсатынан сығып һәм беҙҙә етештерелгәнде илдең башҡа төбәктәренә лә, хатта сит илдәргә сығарыу мөмкинлеге биреү йәһәтенән эшләнә. Проектта ҡатнашыуға фәҡәт республика биләмәһендә урындағы сеймалдан аҙыҡ-түлек етештереүсе предприятиелар ғына индерелә. Шуныһын айырым билдәләп китеү кәрәктер: алкоголь, шул иҫәптән һыра продукцияһына "Башҡортостан тауары" тамғаһы ҡуйылмай. БР Хөкүмәте тарафынан аҙыҡ-түлек тауарҙарына "Башҡортостан тауары" билдәһен һуҡтырыуға рөхсәт алыу тәртибе һәм шарттары тураһындағы положение раҫланды. Республика етештереүселәре акцияла бушлай ҡатнаша, был билдә алыуҙа уларға тигеҙ хоҡуҡтар бирәсәк. Әлеге ваҡытта БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты аҙыҡ-түлек етештереүсе һәм эшкәртеүсе эре һәм урта предприятиеларҙан ғаризалар һәм тейешле документтар ҡабул итә башланы. "Башҡорт туңдырмаһы", "Көмөш ҡар" яуаплылығы сикләнгән ойошмалар, "Авдон" сауҙа йорто, "Өфө икмәк продукттары комбинаты", "Аллат", "Кристалл" таҙа һыу", "Ашхана" һәм башҡа ойошмаларҙан ғаризалар килде лә инде. Был, тимәк, 300-ҙән ашыу төр аҙыҡ-түлек, тигән һүҙ. Ҡулланыусы шуны аңлаһын ине: үҙебеҙҙә етештерелгән, тимәк, экологик таҙа, сифатлы һәм ышаныслы ризыҡ ул. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов аҙыҡ-түлектең тап ана шул сифат кимәлен һәм кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефһеҙлеген иң мөһим мәсьәлә тип билдәләне.


**(Дауамы 2-се биттә).**


АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ...

## "иң-иңдәре" кемдәр булды?

**Стәрлетамаҡ ҡалаһында үткән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2013" XVIII төбәк-ара конкурсында иң яҡшы уҡытыусылар билдәләнде. Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Фәриҙә Ҡазыхан ҡыҙы Миһранова, А. Горький исемендәге 3-сө гимназия уҡытыусыһы Фәнгизә Рафаил ҡыҙы Нафиҡова, Салауат ҡалаһының 23-сө мәктәбе уҡытыусыһы Резида Зиннур ҡыҙы Килсенбаева, Сибай ҡалаһының 1-се мәктәбе уҡытыусыһы Илүзә Баязит ҡыҙы Насирова лауреат исеменә лайыҡ булды, ә Стәрлетамаҡ ҡалаһының Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия уҡытыусыһы Зөлфиә Әбүталип ҡыҙы Баяҙғолова еңеүсе исемен яуланы.**




**(Дауамы 4-се биттә).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БЕРЕККӘН КӨТӨҮҘЕ...

## бүре алмай

**28 мартта Хәйбулла районы үҙәге Аҡъяр ауылында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойоштор-ған түңәрәк ҡор территориаль йәмәғәт ойошмалары тураһында-ғы РФ Дәүләт Думаһы тарафынан ҡабул ителгән 154-се, 131-се Федераль Закондарҙы гәмәлгә ашырыу мәсьәләләренә арналды. Түңәрәк ҡорҙа Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Урындағы үҙидара һәм ижти-мағи берекмәләр буйынса комитет рәйесе Рөстәм КУЗБӘКОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советы ағзалары Иршат АҪЫЛҒУЖИН, Буранбай КҮСӘБАЕВ, Гөлфиә ЯНБАЕВА, Ишембай ҡалаһы янындағы "Смаҡай" территориаль иждимағи үҙидаралығы рәйесе Әнүәр ШӘНГӘРӘЕВ, Хәйбулла, Йылайыр, Баймаҡ, Әбйәлил, Бөрйән райондары вәкилдәре һәм башҡалар ҡатнашты. Был темаға һөйләшеү бығаса Өфө ҡалаһында һәм Мәләүез районында үткәрелгәйне.**

Хәйбулла районы Ибраһим ауылының Баһауетдин атлы ир-уҙаманы рус-япон һуғышында ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, ике "Георгий тәреһе" миҙалы менән бүләкләнә. Һуғыштан ҡайтып килгәндә уны Ырымбур губернаторы поезда төшөрөп алып ҡалып ҡунаҡ итә. Аҙаҡ уны көймәгә мисәүле ат ектереп, ике һыбай биреп, 120 саҡрымда ятҡан тыуған ауылына оҙаттыра. Ягирҙе ауыл аҡһаҡалдары мәсет янында ҡаршылай. Ул "Әгәр ҙә һуғыштан имен-аман ҡайтһам..." тип алдан әйткән әйтеүе буйынса мәсеткә инеп, әруахтар рухына аят уҡытырға, хәйер таратырға ниәтләй. Әммә аҡһаҡалдар уға ҡаршы сыға һәм тәүҙә уның түшендәге тәреләрен һалыуҙы талап итә. Баһауетдин, әлбиттә, уларҙың талабын үтәргә мәжбүр була...

Халҡыбыҙ тарихынан бындай миҫалдарҙы тағы ла бик күп итеп килтерергә булыр ине. Әммә беҙ бында уларҙың артында ятҡан төп фекерҙе әйтеү менән генә сикләнәйек. Ул да булһа: элек-электән халҡыбыҙ үҙидаралығы шул тиклем ныҡлы ойошҡан булған, һәр дәүер империяларының, батшалыҡтарҙың, режимдарҙың ниндәй генә закондары сыҡҡан хәлдә лә, ул үҙен дә, тыуған ерен дә, рухын да яҡлай һәм һаҡлай алған.

Әлбиттә, һәр дәүер беҙгә күп кенә ҡурҡыныстары менән янаған һәм янай. Әммә һәр осраҡта ла халҡыбыҙ үҙенең берҙәмлеге менән был ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алған. Бөгөн килеп беҙҙең алға элек әкиәттәрҙә генә уҡып белгән "аждаһа" килеп басты. Ул "аждаһа"ны тәрләсә атап йөрөтәләр: глобалләшеү, интеграция, урбанизация, донъя капиталы, капитализм, бөтә донъя иҡтисад кризисы, оптималләштереү һ.б. "Аждаһа" беҙҙе еребеҙ-утыбыҙ, асылыбыҙ-телебеҙ менән бер юлы һолголап йотмаҡсы. Әммә "Берекән көтөүҙе бүре алмай" тигән халҡыбыҙ. Территориаль йәмәғәт үҙидаралығын ойоштороуҙың хәҙерге ваҡытта халыҡтың берләшеп, үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға булышлыҡ итеүсе иң кәрәкле һәм берҙән-бер сара икәнлеген Аҡъярҙа уҙған түңәрәк ҡорға килеүселәр бик яҡшы аңланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар был закондың ошоғаса тормошҡа ашырылмай килеүен уларҙың халыҡтың быны атҡарырға әҙер булып етмәүенә бәйләп аңлатты. Бында хаҡлыҡ барҙыр, сөнки үҙидаралыҡтарҙың әлегә тик Ишембай һәм Сибай ҡалалары янында ғына барлыҡҡа килеүе лә күпкә ишара: ҡалаға яҡыныраҡ йәшәүселәр "аждаһа" йөгонтоһон нығыраҡ һәм тиҙерәк тоя. Ҡалаларҙың ауылдарға йөгонтоһо көсәйеп барған ваҡытта был аңлау төпкөлдәргә лә тиҙерәк барып етер, тип ышанғы килә. Һорауҙарығыҙ булһа, гәзиттең бынылтыҡ 7-се һанындағы "Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы - үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алыу юлы түгелме?" тигән мәҡәләгә мөрәжәғәт итегеҙ.**

Әмир ҒҮМӘРОВ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Үҙебеҙҙә етештерелгәнгә етмәй инде..." тигән ҡағиҙәне һанға һуғырға ваҡыттыр, тибеҙ...

(Башы 1-се биттә).

***Ринат ИЛЬЯСОВ, "Башҡортостан колбасалары" Сибай ит комбинатының генераль директоры:*** Үҙебеҙҙә етештерелгәнде халыҡ һәр ваҡыт ихлас һатып ала, яҡшы баһалай - был бәхәсһеҙ. Ни өсөн тигәндә, аҙыҡ-түлек уларҙың күҙ алдында тип әйтерлек эшләп сығарыла. Был инде Израилдән килтерелгән йәшелсә лә, Египет картуфы ла, Төркиә помидоры ла түгел, әлбиттә. Берҙән, ситтән ташылған бындай аҙыҡ-түлек составында ниндәй генә химикат юҡтыр; икенсенән, "ете диңгеҙ, ете тау" аръяғынан килтереп еткергәнсе, былай ҙа шикле генә сифаты тарҡалып бөтөп, уның исеме генә тороп ҡалалыр, тигән уйҙамын. Айырыуса бөгөн, донъяның төрлө мөйөштәрендә туҡтауһыҙ төрлө техноген һәләкәттәр булып торған ваҡытта, халыҡтың үҙебеҙҙә етештерелгән тауарға йәбешеп ятыуы бик тә аңлашыла. Был йәһәттән мин нигеҙҙә үҙебеҙҙең продукцияны күҙҙә тотам: беҙҙең комбинат етештергән ит-колбаса изделиелары уларҙы һатып алырға ҡыҫтау, рекламалауға мохтаж түгел, сөнки һатып алыусы беҙҙең тауарҙы әллә ҡайҙан танып-белеп тора. Ит-колбаса изделиелары менән беҙ тотош Урал аръяғы районларын, унан ҡала Силәбе өлкәһенең республикабыҙға сиктәш төбәктәрен тәьмин итеп киләбеҙ. Урындағы тауар етештереүселәргә һәр төрлө ярҙам саралары ойоштороп, республикабыҙ Хөкүмәте дөрөҫ эшләй. Был айырыуса яңы эш башлап ебәргән предприятиелар өсөн бик мөһим. Ә инде эш бер төрлө яйға һалынһа ла, беҙгә әлеге көндә иң кәрәкле ярҙам - аҡса, йәғни оҙайлы кредиттар бик урынлы булыр ине, сөнки Германия, Австрия кеүек илдәрҙән махсус ҡорамалдар ҡайтартыу өсөн "ҡырып-һепереп" түләйбеҙ ҙә, бер ниңсә ай аҡсаһыҙ ултырырға мәжбүр булабыҙ. Комбинатта 100-ҙән ашыу кеше эшләй, уларға бит хеҙмәт хаҡын да ваҡытында түләп барырға кәрәк. Урында етештерелгән продукцияларға "Башҡортостан тауары" маркаһы биреү, һис һүҙһеҙ, маҡтаулы һәм беҙгә яуаплылыҡ өҫтәүсе бер сара, ул үҙебеҙҙекен рекламалау йәһәтенән бик отошло булмаҡсы.

***Рәйсә ҠАҺАРМАНОВА, һатып алыусы-хужабикә:*** Мин элек-электән, халыҡ ҡырылып ятып "Буш боттары" һатып алған саҡтарҙа ла бындай урындарҙы урап үтер булдым. Ул ваҡытта әле уларҙың ҡайҙарҙалыр йылдар буйы туңдырып яткырылыуы, беҙгә ниндәй юлдар менән килеп етеүе тураһында белмәһәм дә (боттар тарихын беҙ аҙаҡ ҡына белдек), барыбер уны һатып алырға (ә бит арзан да ине!) бер ҙә күңелем тартманы: ас ултырһам, ултырам (асығыу файҙалыраҡ та әле ул), әммә эт ашамаҫтайҙы алып, ризыҡланыр хәлем юҡ, тип уйлай инем, сөнки шулай бер ваҡыт үҙем шаһит булдым: күршеләремдең эте әлеге "Буш бото"н еҫкәне лә, мороно менән ситкә этеп кенә ҡуйҙы, ашаманы тәки. Әлеге ваҡытта ситтән нигеҙҙә йәшелсә-емеш күпләп килтерелә. Баҙарҙарға барып инһәң, шундай матур тамашанан күҙҙәр ҡамаша: сауҙа рәттәрендә емешләктең ниндәйе генә юҡ! Алманың ғына тиҫтәләгән төрлө сорты өйөлөп ята, телегәнеңде һайлап ал. Тик бында ла шикләнергә, икеләнергә урын бар, сөнки көҙ мәлдәрендә баҡсаһында үҫтергәнде һатып торған әбей-бабайҙарҙың алмаһы янында былар уйынсыҡ емешкә оҡшап тора. Халыҡ белмәйенсә "Алманың аҫылын ҡорт ашай" тип әйтмәгәндер бит, ә был "импорт" емештәрҙе химикат менән шул тиклем эшкәртеп үҫтерәләр, бугай, уларҙан хатта ҡорттар ҙа ҡаса. Өҫтәүенә, оҙаҡ һаҡланһын һәм тауар күренеше биреү өсөн емештәрҙең тышын парафин һымаҡ май менән эшкәртәләр икән, ә ул күпме йыуһаң да бөтмәй. Бына шуға күрә лә мин күптән инде "Сит илдеken маҡта ла, үҙебеҙҙекен һатып ал" тигән аҡыл менән йәшәргә тырышам.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 378 һум 36 тингә яҙылырға була. Апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәрегеҙгә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға 330 һумға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигe юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киосканан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Беҙгә булайыҡ, беҙгә-беҙгә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы беҙгә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы беҙгә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов Францияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Жан де Глиниасти менән осрашты. Осрашыуҙа билдәләнеүенсә, Башҡортостан менән Франция араһындағы тышҡы сауҙа әйләнеше 2012 йыл йомғаҡтары буйынса 150 миллион доллар тәшкил иткән. Республика Францияға, тәү сиратта, нефть продукттары поставкалай. Импортҡа килгәндә, Башҡортостан машиналар һәм ҡорамалдар һатып ала.

✓Башҡортостандың муниципаль берәмектәре илдең барлыҡ муниципалитеттары менән бергә быйыл 21 апрелдә тәүгә үҙҙәренең һөнәри байрамын - Урындағы үҙидара көнөн билдәләйәсәк. Был байрам Рәсәй Президенты Владимир Путин Указы менән 2012 йылдың июнендә булдырылды. 21 апрель көнө байрам датаһы итеп юҡҡа ғына һайланманы, 1785 йылдың был көнөндә Екатерина II тарафынан "Ҡалаларға хоҡуҡ грамотаһы" раҫланған.

✓БР Президенты менән Францияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе ике республика араһында инвестицион хеҙмәттәшлекте үҫтереүсе бизнес-проекттар тураһында һөйләште. Ул проекттар араһында Alstom һәм "РусГидро" компанияларының уртаҡ предприятиеһы, Францияның "Сен-Гобен" концерны менән Ҡырмыҫҡалы районында төҙөләсәк гипсокартон етештереү заводы бар. Франция компаниялары Өфөлә трамвайҙар паркын яңыртыу, республиканың тау саңғыһы курорттарында һәм баш ҡала канат юлдар булдырыу буйынса хеҙмәттәрен тәҡдим итте, Башҡортостан баш ҡалаһында йәнә ике "Леруа Мерлен" сауҙа объекты асыу тураһындағы ниәтен белдерҙе.

✓Башҡортостан Хөкүмәте БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына тикшереүгә инвалид баланы уллыҡҡа алған граждандар өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособие күләмен 500 мең һумға тиклем арттырыуҙы күҙ уңында тотҡан закон проектын тәҡдим итте. Бөгөнгө көндә Башҡортостандың балалар йорттарында 145 инвалид бала тәрбиәләнә.

✓Башҡортостандың ҡайһы бер ауылдарында яҙҙы ҡаршылауға арналған "Баш ашы" бороңғо башҡорт милли байрамы тергеҙелә башланы. Йола буйынса, ул яҙғы баҫыу эштәре алдынан үткәрелә. Был көндө кешеләр бер-берейһен ҡунаҡҡа саҡыра, бишбармаҡ, ҡойка, ҡоймаҡ әҙерләй. Был матур, әммә онотола барған байрам йолаларын ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ районының Айыусы ауылында үткәрҙеләр.

*✓ Ғүмере буйы күңелендә кемгәлер, нимәгәлер асыу йөрөткән кеше ситтән ана шул ҡулына һаҫыҡ моҡсай тотҡан асарбаҡ булып күренә лә инде. Ул үҙе лә бәхетле түгел, башҡаларҙы ла ҡыуандырмай...*

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# АСЫУ - АҒЫУ...

## Йотһаң - дарыу

**Асыу, асыуланыу хаҡында халҡыбыҙҙа байтаҡ ҡына мәҡәл-әйтемдәр бар. Уларҙың бер нисәүһе: "Асыу - аҡыл дошманы", "Асыу алдан йөрөр, аҡыл арттан йөрөр", "Асыуыңды артҡа ҡуй, аҡылыңды алға ҡуй", "Асыу башы - йүләрлек, арты - үкенеп үләрлек", "Асыу - бысаҡ, аҡыл - һап", "Асыу - дошман, аҡыл - дуҫ, асыуыңа аҡыл ҡуш", "Асыу йыйма, аҡыл йый", "Асыу килһә - аҡыл китер, аҡылың булһа - асыуың бөтөр", "Асыуыңды ат ит, аҡылыңды теҙген ит", "Ат асыуын арбанан алмайҙар", "Асыу йотоу - ут йотоу", "Асыу һаҡлама, намыҫ һаҡла", "Асыуың килһә, ҡулың тый, әйтмәҫ ерҙә телең тый" һ.б. Күреүебеҙсә, "асыу" һүҙе ҡулланылған күп кенә мәҡәл-әйтемдәрҙә был төшөнсәнең ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғәнәһендә "аҡыл" төшөнсәһе ҡулланыла. Был да юҡҡа түгелдер, сөнки нәҡ йотоп дарыуға әүерелгән асыу ғына һуңынан аҡыл рәүешен ала бит. Урынлы һорау килеп тыуа: аҡыл барлыҡҡа килһен өсөн кеше тәүҙә кемгәлер, нимәгәлер асыуланырға тейешме икән? "Асыу - ағыу, йотһаң - дарыу" әйтеменә килгәндә инде, аҡыл дарыуға әүерелә.**

-Һеҙ шундайын зирәк, аҡыллы. Ниндәй генә сетерекле йә ауыр хәл килеп тыумаһын, сығырығыҙҙан сыҡмайһығыҙ, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйһегеҙ. Башҡа саҡта ла гел йылмайып йөрөйһөгөҙ. Миңә лә, зинһар өсөн, үҙегеҙ кеүек булырға ярҙам итегеҙ әле? - тип үтенеп һораған үҙенең уҡытыусыһынан уҡыусыһы.

Уҡытыусы уның үтенесен ҡабул иткән, шатланып ярҙам итергә булған. Тик быныһ өсөн үтә күренмәле моҡсай һәм бер бөртөк картуф алып килергә ҡушҡан.

-Әгәр ҙә кем менәндер һүҙгә килеп, асыуланышһағыҙ, ошо картуфтың бер яғына үҙегеҙҙен, икенсе яғына шул кешенең исемен яҙып, моҡсайыңа һалып ҡуй, - тигән ярҙам итеүсе мөғәллим.

-Аһ-аһ.. Шул ғынамы ни, нинә бында моҡсай, нинә картуф? - тип, уҡытыусыһының тәҡдименә риза булмаһа ла, ҡашын йыйырған уҡыусыһы.

-Юҡ, ул ғына түгел, һин был моҡсайҙы һәр ваҡыт үҙең менән алып йөрөргә һәм тағы ла берәйһе менән асыуланышһаң, тағы ла бер картуфҡа шундай уҡ яҙыуҙар ырып, моҡсайыңа һалырға тейешһең, - тип һабағын дауам иткән уҡытыусы.

Шулай итеп, уҡыусы уҡытыусыһының күрһәтмәһе буйынса эшләгән: ҡайҙа барһа ла, ҡалдырмай, үҙе менән моҡсайын тотоп йөрөй башлаған. Бер аҙҙан моҡсайға икенсе, тораҡ өсөнсө, бер аҙҙан дүртенсе, бишенсе, алтынсы, артабан тағы ла әллә нисәнсе картуф инеп ятып, ҡулындағы йөк хәтһеҙ генә ауыр була башлаған. Етмәһә, был ваҡытта инде тәүге һалған картуфы сереп, күгәреп, шытып, башҡаларын да тиҙ арала шундай уҡ хәлгә еткергән. Кешеләр унан сәрәнеп, әллә ҡайҙан уратып үтергә тырышҡан. Уға бармаҡ төртөп күрһәтә башлағандар. Ҡыҫҡаһы, уҡыусы асарбаҡ рәүешенә ингән.

Күпмелер ваҡыттан һуң бер ҡулы менән түҙеп торғоһоҙ һаҫыҡ еҫ аңҡып торған моҡсайын, икенсе ҡулы менән танауын ҡаплаған уҡыусы уҡытыусыһы янына йүгереп килеп еткән.

-Моҡсайым үтә ауырлашты, етмәһә, унан түҙеп торғоһоҙ һаҫыҡ еҫ килә. Көлә әҙәм алдында оятлы хәлгә ҡалдым. Һеҙ кешене минән көлдөрөр, мыҫҡыл иттерер өсөн юрый быны эшләгәнһегеҙ. Асыуланыуҙан ҡотолоуҙоң башҡа юлдарын өйрәтегеҙ, зинһар өсөн - тигән ул уҡытыусыһына.

-Моҡсайың эсендә ниндәй хәл-күренеш барһа, һинең күңелеңдә лә шул уҡ күренеш. Моҡсайың - һинең күңелең ул. Әгәр ҙә һин кемгәлер асыуланһаң, асыуыңды буйыңа һеңдермәһәң, йотмаһаң, ул ауыр йөк булып күңелеңдә тороп ҡала. Бер аҙҙан уның янына икенсе бер йөк килеп ята, унан - өсөнсөһө, дүртенсеһе, бишенсеһе. Шул рәүешле һинең күңелеңдә күтәрә алмаҫлыҡ ауыр таш барлыҡҡа киләсәк...

-Ә һеҙ шул ташты күңелемдән алып ташларға ҡушаһығыҙмы ни, улай булғас? - тигән уҡытыусыһының һүҙҙәренең йөгонтоһона ныҡ бирелгән уҡыусы тәьҫирләнеп.

-Ул таш яйлап барлыҡҡа килгәс, уны еңел һәм тиҙ генә алып ташлап та булмаясаҡ. Иң ауыры - ул таш һинең холҡоң рәүешен алыуы. Үҙең беләһең, ҡылыҡтан - ғәҙәт, ғәҙәттән холоҡ барлыҡҡа килә. Тәүге картуф - һинең ҡылығың, икенсе, өсөнсөләре - ғәҙәтең, ә бер моҡсай картуф - холҡоң...

-Улай булғас, мин ул таштан, ул холоҡтан ғүмерем буйына ҡотола алмайыммы инде, уның менән нисек йәшәрмен? - тигән түгелеп илар сиккә еткән уҡыусы.

-Бар бөлә шунда шул. Ҡулыңдағы моҡсайҙы ташлап була, ә күңелдәге ташты - юҡ. Мин был һынау менән һиңә үҙ-үҙеңә һәм күңелеңә ситтән ҡарау мөмкинлеге бирҙем. Ғүмере буйы күңелендә кемгәлер, нимәгәлер асыу йөрөткән кеше ситтән ана шул ҡулына һаҫыҡ моҡсай тотҡан асарбаҡ булып күренә лә инде. Ул үҙе лә бәхетле түгел, башҡаларҙы ла ҡыуандырмай...

-Шулай ҙа, әгәр ҙә алып ташлап булмағас, миңә ул таш менән нишләргә һуң?

-Ул ташты яйлап йомшартып, иретеп була...

-Нисек итеп?

-Бөгөндән, хатта үҙең ғәйепһеҙ, башҡалар ғәйепле булған осраҡта ла, кешеләргә асыуланыуыңды, уларға мат ҡурып йөрөүеңде туҡтат. Кемгәлер асыуланыр йәки кемделер үҙенә асыуландырыр алдынан шуны уйла: был таш һиңә кәрәкмә-юҡмы?..


Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

"Асыу - ағыу, йотһаң - дарыу" әйтемен тәфсирләп аңлатыуҙың классик өлгөһө тип әйтергә лә була был ваҡиғаны. Кеше үҙенең асыуын буйына һеңдерә, йота алһа ғына ул асыу аҡылға, һабаҡҡа әүерелә, киреһенсә булған осраҡта ул кешене рухи һәм физик ҡыйралышҡа ғына алып килә. Төптән уйлап ҡараһаң, "Ҡар башына ҡар етә" әйтеменең мәғәнәһе лә тап ошонда кеүек. Бер уйлаһаң, уҡыусы үҙе менән алып йөрөргә мәжбүр булған моҡсайҙы кешене ваҡытынан алда донъянан алып китеүсе сәбәп, ауырыу, сир итеп тә ҡарарға була бит. Был фекерҙе уҡытыусы әйткән фекергә тапҡырлаһаҡ, ул сәбәп тә, сир ҙә, ауырыу ҙа кешенең шул уҡ холҡо булып аңлашыла. Холоҡ, характер - ул кешенең яҙмышы, ти философтар.

Беҙ тормошта үҙебеҙҙе кемгәлер, нимәгәлер асыуланырға, нәфрәтләнергә мәжбүр иткән хәл-ваҡиғаларҙан, һәр төрлө көтөлмәгәнлектәрҙән азат була алмайбыҙ. Былдай осраҡтарҙа иң ауыры аффект хәленә етеүҙәр, сөнки был осраҡта кеше үҙе менән контроллек итеүҙе тулыһынса юғалта, үҙенә физик һәләкәт янауына ла иғтибар итмәйенсә, күҙен йомоп, кемгәлер, нимәгәлер ташлана йәки булмаһа логика күҙлегенән баһалап булмаҫлыҡ алйотлоҡтар йә батырлыҡтар яһай. Психологтар был халәттән, интеллект, алған тәрбиә кимәленә лә ҡарамай, бер кем дә азат була алмай, тип иҫәпләй. Закон буйынса, хөкөм ҡарары сығарғанда ла аффект хәле ғәйепте йомшартыусы дәлил булараҡ ҡарала.

Дин белгестәре иһә, аффект, стресс, депрессия күренештәре булмай, бары тик Аллаһы Тәғәләгә ышанмау ғына бар, тип иҫәпләй. Был осраҡта кешене сығырынан сығарған хәл, ваҡиға Хоҙайҙан ебәрелгән һынау ғына итеп ҡабул ителергә тейеш. Диндәге кешеләрҙең ошондай көтөлмәгән хәл-ваҡиғаларҙы оло сабырлыҡ менән тыныс ҡына ҡабул итә белеүе лә ошоға бәйлеләр. Нисек кенә булмаһын, барыһы ла кешенең үҙенә бәйле, йәғни уны һәләкәткә илтеүсе ағыуы ла, һауыҡтырыусы дарыуы ла фәҡәт үҙендә генә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы киләһе һанда.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Халыҡ-ара балалар уйындары Комитетының генераль секретары Ричард Смит Өфө ҡалаһы хакимиәте исеменә рәхмәт хаты ебәрҙе, Өфөнөң Халыҡ-ара балалар уйындары Комитеты ағзаһы булыуы хаҡында белдерҙе. Артабан Өфө барлыҡ Уйындарға саҡырыласаҡ. Бынан тыш, баш ҡала тауыш биреү хоҡуғы менән Генераль Ассамблеяның даими ағзаһы булды. Хәҙер ул Халыҡ-ара балалар уйындары Комитетына үҙенең вәкилен тәҡдим итә ала. Өфө 2013 йылдың 15 августында Канаданың Виндзор ҡалаһында үтәсәк Халыҡ-ара балалар уйындары Комитеты Президенты Торстен Раштан Генераль Ассамблеяға саҡырыу алды ла инде.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубы" автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы идараһының сираттағы ултырышы үтте. Көн тәртибендә "Салауат Юлаев" хоккей клубының баш тренерын тәғәйенләү мәсьәләһе ҡаралды, тип хәбәр итте клубтың матбуғат хеҙмәтенән. Клуб етәкселеге тәҡдиме буйынса идара был вазифаға йәш Владимир Юрзиновты тәғәйенләне. Быға са ул команданың баш тренеры вазифаһын ваҡытлыса башҡара ине.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Волга буйы федераль округы Советы ултырышында ҡатнашты, уны Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич үткәрҙе. Ултырышта һүҙ округ төбәктәрендә демографик сәйәсәтте тормошҡа ашырыу тураһында барҙы. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда демографик хәл яҡшыра бара. Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында Башҡортостан күп балалыҡ кимәле буйынса беренсе урында тора (республикала 34,5 мең күп балалы ғаилә йәшәй, уларҙа 100 меңдән ашыу бала тәрбиәләнә).

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһында тыуып үҫкән совет дипломаты, йәмәғәт һәм сәйәсәт эшмәкәре Хәкимов Кәрим Ғәбдрәүеф улының тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, СССР менән ғәрәп-фарсы донъяһы араһында йылы мөнәсәбәттәр булдырыуға тос өлөш индергән Кәрим Хәкимовтың юбилейына арналған саралар 2015 йылда Башҡортостанда ойоштороласаҡ.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕНСИЯ АРТТЫ

**Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Ҡарары менән ошо йылдың 1 апреленән пенсиялар күләмдәрен индексациялау коэффициенттары раҫланды. Хеҙмәт пенсиялары алыусыларҙың пенсия күләме 3,3 процентҡа артты. Был ошо категория граждандар пенсияһының йыл башынан алып икенсе тапҡыр артыуы: 1 февралдән хеҙмәт пенсиялары 6,6 процентҡа индексацияланғайны инде.**

Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһе идараһыны Фоат Хантимеров әйтеүенсә, индексация һөҙөмтәһендә ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме 9 800-ҙән 10 085 һумға артасаҡ. 1 апрелдән республикала социаль пенсияларҙың уртаса күләме 6 024 һум тәшкил итәсәк. Ике пенсия алыусыларҙың ике пенсияһы ла арта. Уларҙың уртаса күләме, алыусының категорияһына ҡарап, 16 800 - 25 400 һум тәшкил итәсәк.

Бынан тыш, Советтар Союзы һәм Рәсәй Федерацияһы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" һәм Ленин ордендары менән наградланған граждандар, шулай уҡ саҡырылыу буйынса хәрби хеҙмәттә булған хәрби хеҙмәткәрҙәргә инвалидлыҡ буйынса пенсиялар, уларҙың ғаиләағзаларына һәм радиация тәьҫиренән зыян күреүселәргә һ.б. түләүҙәр күләме 1 апрелдән 1,81 процентҡа артасаҡ.

# ЭШ БИРЕҮСЕГӘ - ЯҢЫ ИҒӘНӘ

**2013 йылдың 1 ғинуарынан алып зарарлы һәм ауыр шарттарҙа башҡарылған эштәр, билдәләнгән бөтә шарттарҙы ла теүәл үтәгән осраҡта, махсус стаж иҫәбенә индереләсәк, шул иҫәптән эш биреүсе тарафынан 1-се исемлек буйынса страховка иғәнәләре өҫтәмә рәүештә - 4 процент, 2-се исемлек һәм "бәләкәй" исемлек буйынса 2 процент түләнергә тейешле.**

Зарарлы һәм хәүефле производствола эш биреүселәр 2013 йылдың 1 ғинуарынан Федераль закон нигеҙендә (N 243-ФЗ) өҫтәмә страховка иғәнәләре түләргә бурыслы. Өҫтәмә страховка иғәнәләре түләнергә тейешле эш төрҙәре "Рәсәй Федерацияһында хеҙмәт пенсиялары тураһында" закондың 27-се статьяһының айырым пункттарында исемләп әйтеп бирелгән. Өҫтәмә тариф буйынса страховка иғәнәләре түләүҙе раҫлау, айырым шарттарҙа эшләүҙе раҫлаған кеүек үк, индивидуаль иҫәп (персонификацияланған) мәғлүмәттәргә ҡарап, ҡартлыҡ буйынса ваҡытынан алда пенсияға сығыу хоҡуғын билдәләгәндә башҡарыла. Айырым хеҙмәт шарттарында эш башҡарыу билдәләре 2013 йылдың 1 кварталынан башлап страховка иғәнәләрен иҫәпләү һәм өҫтәмә тарифта түләү менән бәйле буласаҡ.

Билдәләнеүенсә, 2013 йылдың 1 мартына 717 эш биреүсенән 58,2 млн. һум күләмендә өҫтәмә страховка иғәнәһе килгән. Йыл башынан республикала эш биреүселәре өҫтәмә тариф түләгән 28 кешегә ваҡытынан алда пенсия тәғәйенләнгән.

**Рәсәй Пенсия фонды БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АҢЛАЙЫШЛЫ ДИАЛОГ КӘРӘК



**Тарихтан мәғлүм булыуынса, хәҙер ҡайһы бер эшмәкәрлектәрен анализлап, дөрөҫ булмаған, тип баһалаһаҡ та, большевиктарҙың, аныҡлап әйткәндә, ошо йүнәлеш башында торған юлбашсы В. Ульяновтың йәмғиәтте туплауҙа төп ролде матбуғат сараһына йөкмәтеүе бөгөн дә үҙенең актуаллеген юғалтмаған. Хәҙер ҙә граждандар йәмғиәтен үҫтереүҙә киң мәғлүмәт саралары ҙур роль уйнай, әммә… уны бик үк йоғонтоло тип әйтеп булмай. Сөнки уның ойошторoусыны булып власть органдары тора һәм кем сығымдарҙы финанслай, шул көйгә заказ бирә, тиғәнерәк ҡараш йәшәй һәм был ысынбарлыкта шулай ҙа.**

Әммә Өфө ҡала округы хакимиәтендә былтыр ғына ойошторолған мәғлүмәт-аналитика идаралығының киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән ҙур күләмдә кәңәшмә үткәреүе был фекерҙе бер аҙ икенсе юҫыҡҡа бороп ебәрҙе.

- Матбуғат саралары һәм журналистар - власть менән халыҡ араһын бәйләп тороусы күпер, - тип билдәләне үҙенең сығышында ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов. - Һәм беҙҙең арала аңлайышлы диалог булырға тейеш. Бөгөн Өфөлә граждандарҙың уңайлы йәшәүе өсөн шарттар тыуҙырыла һәм Рәсәй буйынса төрлө рейтингтарҙа беҙ лидерҙар иҫәбендә киләбеҙ. Матбуғат саралары ыңғай күренештәрҙе дөрөҫ баһаларға, үҙ ҡалаһының патриоты булып, уларҙы халыҡҡа күрһәтергә тейеш. Әлбиттә, тәнҡит кәрәкмәй тип әйтмәйем, тәнҡит тә булһын, әммә ул объектив булырға тейеш. Бының өсөн редакция штатында ҡала хужалығын белгән, уның эшмәкәрләген аңлаған бер белгес булыуы йәки журналистарҙың ошо өлкәлә хәбәрҙар булыуы мотлаҡ. Юҡһа, ҡайһы бер мәҡәләләр белгестәрҙә көлкө генә тыуҙыра, ә халыҡтың башы бутала. Бөгөн беҙ барыбыҙ ҙа иҡтисадҡа бәйле. Тотош илдең артабанғы үҫеше 30-40 ҡаланың нисек үҫешенән тора. Тап улар тотош илдең артабанғы яҙмышын үҙ иңендә күтәрә лә инде. Уларҙы үҫеш үҙәктәре тип атайҙар. Киң мәғлүмәт саралары ярҙамында Өфө лә шундай үҫеш үҙәктәренең береһенә әүерелергә, граждандар йәмғиәте менән аралашыуҙың яңы кимәленә күтәрелергә тейеш...

Ирек Ишмөхәмәт улы быйылдан башлап бындай кәңәшмәләрҙе йыл һайын үткәрергә һәм киң мәғлүмәт сараларына арзан йәки ялтырауыҡ мәғлүмәт эҙләүселәр тип түгел, ә иҡтисадтың бер тармағы итеп ҡарарға тәҡдим итте. Шулай уҡ уның киләһе йылдан баш ҡаланың мәғлүмәт майҙанында уңышлы эшләгән журналистарҙы һәм киң мәғлүмәт сараларын төрлө номинацияларҙа бүләкләү идеяһы ла йыйылыусылар араһында хуплау тапты. Ғөмүмән, был һөйләшеү мәғлүмәт тармағының әһәмиәтен тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алды. Юҡҡа һаман заманында ваҡытлы матбуғат баҫмаһын нәшер иткәндә уның әһәмиәтен юғары баһалап, осҡондан ялҡын ҡабыныр, тимәгәндәрҙер. Бары тик ошо осҡон, ошо ялҡын зыян килтермәһен, ә файҙалы яҡтылыҡ сығанағы булһын ине.

Әйткәндәй, ҡала округы хакимиәте ҡайһы бер журналистарҙың хеҙмәтен билдәләп үтте һәм улар араһында редакциябыҙ журналисы Зәйтүнә Әйле лә бар.

АФАРИН!

# УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ...

## "иң-иңдәре" кемдәр булды?

**(Башы 1-се биттә).**

Туған тел уҡытыусыһының тәжрибәһен арттырыу, ижади оҫталығын асыуға йүнәлтелгән был абруйлы конкурста быйыл - 55, шул иҫәптән, Ырымбур һәм Һамар өлкәһенән 2 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ҡатнашты. Беренсе турҙа улар асыҡ дәрестәр, инновацион эш тәжрибәһе буйынса һынау үтһә, икенсе турҙа иһә оҫталыҡ дәрестәре, асыҡ лекция, финалистар өсөн актуаль темалар буйынса фекер алышыу төрҙәрендә ярышты. Баһалар асыҡ тауыш биреү юлы менән билдәләнде.

- Был конкурс үткәрелә башлаған мәлдән алып, унда йыл һайын тиерлек ҡатнашам. Сағыштырып ҡарағанда, быйылғы бәйгеселәр белеме, үҙҙәрен тотоу кимәле, эрудицияһы менән айырылып торҙо, ошоноң менән улар баһалама ағзаларында тик ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы. Араларында белемле һәм илһөйәр йәштәрҙең күп булыуы ла шатландырҙы, - тиғән баһа бирҙе бар ғүмерен башҡорт теле уҡытыу методикаһы өлкәһендә эшләүгә арнаған ғалим, конкурстың баһалама ағзаһы Вәкил Хажин бәйгегә.

Быйылғы конкурстың тағы бер үҙенсәлеге тип унда ҡатнашыусылар араһында ҡала уҡытыусыларының күп булыуын әйтергә мөмкин булыр ине. Вәкил Исмәғил улы билдәләүенсә, ҡалаларҙа мөхит, уҡытыусылар коллективындағы үҫеш тә бығаға йоғонто яһамай ҡалмай. Шулай ҙа был күренеш ҡалала дөйөм уҡытыу кимәле яҡшыраҡ булғанлыҡтан түгел, ә конкурс положениеһының үҙенсәлектәре менән бәйле. Ун һигеҙ йыл эсендә республика мәктәптәрендә эшләүсе иң һәләтле һәм сағыу уҡытыусылар унда ҡатнашырға өлгәрҙе инде. Ә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре йылдан-йыл кәмегән ваҡытта йәштәр ауыл мәктәптәренә ҡайтырға ынтылып тормай, тимәк, конкурста ауыл уҡытыусыларының һирәк ҡатнашыуына был да сәбәп булып тора, тиергә мөмкиндер.

Эйе, бөгөн мәғариф системаһы әҙлекһеҙ реформаларға, тимәк, тетрәнеүҙәргә дусар ителә. Ул тетрәнеүҙәр башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу мәсьәләләренә лә ҡағыла. Туған телдәрҙе уҡытыуҙың сифатын күтәреү, тәжрибә уртаҡлашыу, уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү өсөн ойошторолған ошондай йыл уҡытыусыһын асыҡлауға йүнәлдерелгән конкурстарҙың әһәмиәте лә шунда - улар уҡытыусыға тәжрибәһе менән уртаҡлашырға ғына түгел, ә был өлкәлә булған проблемаларҙы асыҡларға, бәйге барышында яңғыраған тәҡдимдәр һәм фекерҙәрҙе тейешле кешеләргә ишеттереүгә лә булышлыҡ итә.

Әйткәндәй, Өфөлә ошо көндәрҙә "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2013" бәйгеһе старт алды. Ул быйыл 23-сө тапҡыр уҙғарыла. Конкурста республика мәктәптәренең төрлө фән уҡытыусылары иң яҡшы уҡытыусы исеме өсөн көс һынашасаҡ. Уның сиктәрендә рус теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы ла билдәләнәсәк.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостанда 7,7 мең күп балалы ғаилә һәм инвалид бала тәрбиәләгән 1,4 мең ғаилә бушлай ер участкалары алған. Бөгөн республикала өс һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 36,7 мең күп балалы ғаилә һәм инвалид бала тәрбиәләгән 12,5 мең ғаилә йәшәй. Бушлай ер участкаһы алыу өсөн 17740 күп балалы ғаилә һәм инвалид бала тәрбиәләгән 4010 ғаилә сиратка торған. Төбәктә 3395 ер участкаһына биләү хоҡуғы теркәлгән. 1021 күп балалы ғаилә үҙҙәренен участкаларында төҙөлеш эштәре алып бара, 436 ғаилә ерҙәрен һатҡан.

✓ "Эксперт" күсемһеҙ милек агентлыҡтары селтәре мәғлүмәтенә ярашлы, Өфөлә элиталы торлаҡҡа уртаса хаҡ квадрат метрына 83,5 мең һум тәшкил итә. Беренсе кварталда ул 4,6 процентҡа арткан. Бер бүлмәле фатирҙарға хаҡ - квадрат метрына 79 мең һум (йыл башынан хаҡ үҙгәрмәгән), ике фатирлы бүлмәләргә - 85,5 мең (квартал эсендә хаҡ 8 процентҡа арткан), өс бүлмәле фатирҙарға - 85,7 мең (плюс 2,7 процент), күп бүлмәле фатирҙарға уртаса хаҡ квадрат метрына 85,5 мең һум (плюс 0,5 процент) тәшкил итә.

✓ Башҡортостан Республикаһының уҡыу-курс комбинатында һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе машина йөрөтөргә өйрәтәсәктәр. Курстарға яҙылыу 1 апрелдән башланды. Был маҡсаттарға "Рено Логан" автомобиле ҡулайлаштырылған. Дәрестәр кәм тигәндә ике ай дауам итәсәк. Автомобиль йөрөтөүгә медицина персоналынан рөхсәт ҡағыҙы алған барлыҡ теләүселәр уҡытыласаҡ. Курстарға (347) 228-56-36 телефоны буйынса яҙылырға мөмкин. Учреждение адресы: Өфө ҡалаһы, Владивосток урамы, 5.

✓ Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылында "Башинформ" агентлығы "Ижтимағи электрон гәзит" менән берлектә Ҡоштар көнөн тергеҙеү буйынса яңы экологик акция башлай. Акция сиктәрендә "Башинформ" агентлығы заказы буйынса 102 сыйырсыҡ ояһы әҙерләнде, улар Өфө парктарында һәм скверҙарында урынлаштырылды. Хәҙер журналистар айыуҙар, төлкөләр һәм һыуһарҙарҙың торлаҡ мәсьәләһен хәл итә, йәғни Бөрйән һәм Хәйбулла райондарында 102 айыу өңө эшләү һәм 102 өң ҡаҙыуҙы планлаштыра. Өңдәрҙең конструкцияһын әҙерләүгә Өфөнөң атҡаҙанған зоология белгестәре йәлеп итеүле.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

**Урам исемдәренең төрлөлөгөнә иҫ китерлек. Ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле булғаны ла, билдәле кеше исемен йөрөткәне лә һанап бөткөһөҙ. Шулай уҡ төрлө илдәрҙә башҡа төбәктәрҙең йәки ҡалаларҙың исемен үҙ иткәндәре лә йыш осрай. Ундайҙар исемлегенә Башҡорт атамалы урамдарҙы, тыҡрыҡтарҙы ла индереп була.**

# ЭФИОПИЯЛА - ӨФӨ ҠАЛАҺЫ...

## Иранда - Салауат ауылы



Bashkir Street, Corona, CA

Быҙдай исемде йөрөткән урамды эҙләп алыҫ йөрөйһө түгел. Үҙебеҙҙең Өфөлә лә Башҡорт урамы бар. Ул Алексеевка ҡасабаһында урынлашҡан һәм Әкиәт урамынан алып Тоғролоҡ урамына тиклем һуҙыла. Шулай уҡ Алексеевкала Башҡорт тыҡрығы барлығын да оноторға ярамай. Стәрлетамаҡ ҡалаһында ла Башҡорт урамы буйлап үтергә мөмкин. Әлбиттә, был исемлек тулы түгелдер һәм республика исемен йөрөтөүсе урындар һаны күберәктер. Шулай ҙа Башҡортостанда быҙдай исемле урам һәм тыҡрыҡтарҙың булыуына аптырарға түгел, ә бына Рәсәйҙә һәм хатта сит илдә башҡорт атамаһын йөрөткән урындарҙы күреү ҡыҙыҡ күренеш. Мәҫәлән, Рәсәйҙең Ростовтағы Дон, Пермь, Волгоград, Ҡаҙан ҡалаларында нәҡ ошондай исем йөрөткән урамдар бар икән. Шулай уҡ Ҡаҙағстандың Алматы, Украинаның Харьков, Донецк, Краматорск һәм Днепропетровск ҡалаларында ла урамдарына Башҡорт исемен биргәндәр, рәхмәт яуғырҙары.

Элекке СССР киңлектәрен ҡалдырып, сит илдәргә лә күҙ һалайыҡ, сөнки алыҫ ҡитғаларҙа ла беҙҙең республика исемен йөрөтөүсе урындар байтаҡ. Мәҫәлән, әгәр ҙә кемгәләр Американың Калифорния штатында урынлашҡан Элькҡ Гроув ҡалаһына барырға тура килһә, мотлаҡ рәүештә Башҡорт урамын күрмәйенсә китмәгеҙ! Шулай уҡ ошо уҡ штаттың Корона ҡалаһында һәм Американың иң ҙур ҡалаларының береһе - Лос-Анджелеста ла Башҡорт урамы, ә Төньяҡ Каролина штатындағы Браунс Саммит ҡалаһында Башҡорт тыҡрығы бар.

Әйтергә кәрәк, Башҡорт атамаһын Америка ғына түгел, ә алыҫ Англия ла үҙ итә. Был илдең картаһында ла Башҡортостандың бәләкәй генә өлөшөн табырға була. Мәҫәлән, Вестбери ҡалаһында Башҡорт шоссеһы буйлап машинала елдерергә мөмкин. Шәп бит!

Ә эҫе Эфиопияла йәки алыҫ Иранда башҡорт йә Башҡортостанды иҫләткән берәй урынды табып булырына ышанаһығыҙмы? Ышанырға тура килер, сөнки Эфиопияла Өфө ҡалаһы, ә Иранда Салауат ауылы бар. Салауат атамаһын хатта Ерҙә генә түгел, ә сикһеҙ-ҡырыйһыҙ йыһан киңлегендә лә осратырға мөмкин. Мәҫәлән, Марс һәм Юпитер планеталары араһында 1979 йылда Бельгия астрономы тарафынан асылған Салауат астероиды өйрөлә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алыҫ илдәрҙә төрлө телдә беҙҙең күңелдәргә яҡын һәм ҡәҙерле "башҡорт", "Башҡортостан", "Өфө", "Салауат" һүҙҙәренең яңғырауы шатландыра. Тик ошо урында Башҡортостан ғына түгел, хатта Рәсәй хаҡында аҙ хәбәрҙар булған сит ил вәкилдәренең беҙҙең республикабыҙ, баш ҡалабыҙ һәм милли батырыбыҙ исемен йөрөткән атамаларҙы ҡулланылышҡа индереүе нисек килеп сыҡты икән тигән һорауҙың тыуыуы тәбиғи. Был ҙур тикшереү талап иткән ҡыҙыҡлы тема һәм ҡасан да булһа уны өйрәнеүсе һәм аныҡлаусы табылыр, тип ышанғы килә.**

Гөлназ МАНАПОВА
әҙерләне.



Bashkir Rd, Westbury, Wiltshire BA13, Great Britain

ИҒТИБАР: КОНКУРС!

# ЭШТЕҢ ОЯТЫ ЮҠ,

## эш юҡ, тип лаф ороу оятыраҡ

**Ил президенттарына ла һәйкәлдәр бик һирәк, ләкин урам һепереүсе профессияһына Өфөнөң иң ҙур урамдарының береһендә, ҙур сауҙа-күңел асыу комплексы ҡаршыһында һәйкәл бар. Быны хеҙмәт кешеһенә дан йырлау символы тип ҡабул итергә кәрәктер. Сөнки бөгөн Рәсәй халҡы араһында дипломлылар күп, эшләргә кеше юҡ.**

Ысынлап та, ниндәйҙер һөнәр, тармаҡ буйынса белгестәр шул тиклем күп әҙерләнә, уҡыуын тамамлап, ҡулына диплом алғас, уға эш табыу өсөн ҡайтанан икенсе һөнәр алыуға квалификация үтергә тура килә. Киң мәғлүмәт саралары, бигерәк тә телевидение, интернет йәштәргә матур тормош, ҡыҙҙарға бай кешегә кейәүгә сығыу, егеттәргә бай кәләш табыу идеяһын көнө-төнө пропагандалай. Ата-әсәләр ҙә балаларының теләген иҫәпкә алмай, ҡасандыр үҙҙәренең тормошҡа ашмаған хыялын балалары аша тормошҡа ашырыу маҡсатында уларҙы үҙҙәрене оҡшаған юғары уҡыу йортона уҡырға индерә. Һөҙөмтәлә шундай хәл-торош күҙәтелә: бик күп ауыл хужалығы, сәнәғәт предприятиелары, ул ғына ла түгел, хатта ябай ғына урам һепереүсе урынына ла кеше табыуы бик ҡыйын.

Был йәһәттән Өфө ҡала округы хакимиәте торлаҡ-коммуналь хужалығында эшләүселәрҙе дәртләндереү маҡсатында уларҙы йәшәү урыны менән тәьмин итеү, 10-15 йылдан һуң был торлаҡты хосусилаштырыу мөмкинлеген биреү тураһында положение әҙерләнә, ошо көндәрҙә Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Башҡортостан Журналистары союзы, БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы беренсе тапҡыр "Медиапрофи" тип аталған премия булдырҙы. Уның төп маҡсаты журналистарҙың профессиональ кимәлен күтәреү, һәлөтле журналистарҙы табыу тип билдәләнһә лә, быйылғы тема "Хеҙмәт кешеһе" тип атала һәм эшсе профессияһының абруйын арттырыу бурысын үҙ өҫтөнә ала. Сөнки бөгөнгө ябай эшсе ҡулдарына күрсәк ваҡытында тап ошо ҡытыршы, шыраулы, ярғыланып бөткән ҡулдарҙың сәнәғәтте һәм тотош ил иҡтисадын үҫтереүҙә нигеҙ булып тороуын күрһәтеү зарур. Ниндәй генә заманалар килмәһен, ниндәй генә ҡоролош алмашынмаһын, тап ябай эшселәр, һөнәрселәр, крәҫтиәндәр йәмғиәттең нигеҙен тәшкил иткән. Бер ниндәй "креатив синыф" та хеҙмәт кешеһен алмаштыра алмай. Журналистар алдында ошо теманы асып биреү бурысы тора.

Әйткәндәй, премия алты:"Иң яҡшы репортаж", "Иң яҡшы әңгәмә", "Иң яҡшы очерк", "Иң яҡшы аналитик мәҡәлә", "Иң яҡшы фоторепортаж", "Иң яҡшы Интернет-проект" номинацияларҙы буйынса билдәләнәсәк. Республика премияһының генераль партнеры - "Башнефть" асыҡ акционерҙар йәмғиәте. 31 марттан 10 ноябргә тиклем баҫылған эштәр ҡабул ителә. Конкурс үҙе алты этаптан тора. Премия күләменә килгәндә инде, һәр номинацияла бер генә еңеүсе буласағын иҫәпкә алып, 50 мең һум тәшкил итәсәк. Әлеге ваҡытта Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге республика Хөкүмәте премияһының күләме лә шул саҡлы...

Зәйтүнә ЙӘНТУРИНА.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Тоҙ



Тоҙ менән күп ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкин.

❖ Ҡан баҫымын күтәреү өсөн тел аҫтына бер семтем тоҙ һалып һурығыҙ, аҙаҡ йотоғоҙ.

❖ Ҡара икмәк телеменә һалып, һыуһыҙ ғына ашағыҙ. Хәл енеләймәһә, 1 сәғәттән тағы ҡабатлағыҙ.

❖ Эс ҡатҡанда 2/3 стакан йылымыс һыуға 1 балғалаҡ тоҙ һалығыҙ һәм 1/3 стакан һөт өҫтәгеҙ. Шуны иртәнсәк ас ҡарынға эсегеҙ. Һөҙөмтәһе булмаһа, 2 сәғәттән тағы ҡабатлағыҙ.

❖ Йүткергәндә тоҙ менән ингаляция яһарға онотмағыҙ.

## Үт ҡыуығындағы таш

Үт ҡыуығындағы ташты иретеү өсөн 2 ҡалаҡ гөлйемеш тамырын ярты литр һыуҙа ҡайнатырға һәм 15 көн буйы көнөнә 3 мәртәбә 1/3 стакан эсергә.

## Ашҡаҙанды дауалау

Гастриттан 1 ҡалаҡ кесерткән, юл япрағы, һары мәтрүшкә һәм аҡ сәскәне 1 литр ҡайнар һыуҙа бешерергә, 2 сәғәт йылы урында төнәтергә. 1-әр стаканлап көн буйына литр ярым эсергә. Дауаланыу аҙна-ун көн дауам ителә.

## Үҙәк көйһә

❖ Ҡарабойҙай ярмаһын табала әҙерәк ҡыҙҙырып, порошок итеп ашарға.

❖ Иртәнсәк ас ҡарынға һыуҙа бешкән ҡарабойҙай бутҡаһы ашарға.

## Баланы диатез яфалаһа

❖ Температураһы 37-38 градус булған 1 биҙрә һыуға 100 грамм крахмал һалырға һәм 10 минутлыҡ ванна яһарға. Көн һайын йәки көн аралаш эшләргә.

❖ Кибеттәрҙә һатылған 1 ҡап лавр япрағын эмаль һауытҡа һалып, 10 литр һыу өҫтәргә, 1-2 минут ҡайнатырға. Һалҡын һыуға 1/3 өлөш лавр ҡайнаған һыуҙы өҫтәргә һәм баланы ҡойондорорға. Һабынһыҙ йыуынырға, һөртөнмәскә, тән үҙе кипһен. Диатез тотошлай бөтһөн өсөн 5-7 процедура ла етә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

**"Тормош - театр. Беҙ унда бары тик актерҙар ғына", тигән ҡасандыр А. Чехов. Ысынлап та, ошо тормош тигән ҙур сәхнәлә һәр кемебеҙ үҙ ролен башҡара. Ләкин унда сценарий алдан яҙылып, ролдәр алдан уҡ бүленгән, бары тик һүҙҙәрен ятлап алып, онотмай һөйләргә генә кәрәк. Әммә ошо ҡалыптан, хаҡ тип баһаланған яуаптарҙан саҡ ҡына ситкә тайпылып, балаларҙың фекеренә, уларҙың нисек уйлауына ла иғтибар йүнәлтеү маҡсатынан баш ҡаланың Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының 11-се синыф уҡыусылары - Илнара Яҡупова, Айҙар Йоносов, Ғәзинур Баязитов, 10-сы синыф уҡыусылары - Азалия Солтанова, Гөлназ Мөхәмәҙиева, 9-сы синыф уҡыусыһы Гүзәл Әлибаева менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ҮҘЕБЕҘҘЕ ХӨРМӘТ ИТӘБЕҘ -

## туған телебеҙҙә һөйләшәбеҙ



**▸ Һеҙ - ҡала мөхитендә үҫкән башҡорт балалары. Бер аҙға ғына милләттең киләсәге дилбегәһен ҡулығыҙға алғанһығыҙ тип хис итеп, ҡалыплашҡанса түгел, ә үҙегеҙсә ҡала шарттарында башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү өсөн нимә эшләү мөһим, тип уйлайһығыҙ?**

**Илнара:** Мин, тәү сиратта, өйҙә ата-әсәләр менән башҡортса һөйләшергә кәрәк, тип уйлайым. Мин үҙем шәхсән башҡорт халҡының оҙон көйҙәрен дә, заманса эстрада йырҙарын да яратам һәм улар минә бик оҡшай. Әхирәттәрем менән боронғо йырҙарҙы тыңлағанымдан көлә, әммә кемдер көлә тип кенә мин үҙемдең ҡаныма, йәнемә яҡын нәмәләрҙән баш тарта алмайым. Ауылға ҡайтһам да өләсәйем менән башҡортса аралашам, ул минә үҙенең йәш саҡтарын һөйләй, икәүләп серләшәбеҙ. Шуға ла башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү, тәү сиратта, ғаиләнең бурысы икәнлегенә инанам. Дуҫтарым, әхирәттәрем менән дә үҙ-ара башҡортса аралашабыҙ. Ҡайһы ваҡытта үҙ телендә һөйләшеү башҡалар аңламаһын өсөн дә кәрәк.

Күптән түгел генә Башҡортса Википедия барлығын ишетеп ҡалып, шул сайтҡа ингәйнем. Ҡыҙыҡ мәғлүмәттәр күп унда. Шулай уҡ Интернет селтәрендә бик күп башҡорт сайттары бар, уларҙы арттырырға, киңәйтергә, ҡыҙыҡлыраҡ итергә кәрәк. Шул ваҡытта үҫмерҙәр үҙҙәре үк туған теле менән ҡыҙыҡһына башлаясаҡ, үҙҙәренең башҡортса сайттарын асасаҡ, унда инеүселәрҙе арттырыу маҡсатынан уларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ нәмәләр уйлап табасаҡ, тип уйлайым.

**Айҙар:** Башҡорт телен йөрөтөүсе милләт вәкилдәре булғас, беҙ ҡайҙа ғына булһаҡ та шул телдә һөйләшергә, шул телде һаҡларға һәм ғорурланырға тейешбеҙ. Минеңсә, үҙен хөрмәт итмәгән кеше генә әсә телен онотоуы мөмкин. Үҙен хөрмәт иткән башҡортҡа телен дә, ете быуынын да белеү зарур.

**Гөлназ:** Хәҙерге үҫмерҙәр баҫма нәшриәткә ҡарағанда интернет, телевидение тапшырыуҙарын үҙ итә, шуға ла уларҙы ылыҡтырырлыҡ программалар күберәк башҡорт телендә булырға тейештер, моғайын. Заман бит бер урында тормай, шуға ылыҡтырырлыҡ мөхит булдырыу зарур. Әлбиттә, ғаиләгә лә күп нәмә бәйле. Мәҫәлән, ата-әсәләре русса ғына һөйләшә икән, балалар ҙа үҙҙәренең башҡорт телен, башҡорт булыуын онотасаҡ. Сөнки телде белеү, уны камиллаштырыу өсөн күнекмә кәрәк. Ә иң яҡшы күнекмә - ул өйҙәге аралашыу. Хәҙер мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы кәметәләр, ҡайһылыр мәктәптәрҙә бөтөнләй бөтөрөргә уйлайҙар. Минеңсә, был дөрөҫ түгел, сөнки беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ икән, уҡыусылар башҡорт телен өйрәнергә тейеш. Икенсе телде өйрәнеү бер кемгә лә зыян иткәне юҡ әле. Мәҫәлән, башҡорт телен белһән, инглиз телен өйрәнеүе еңелерәк, сөнки унда үҙенсәлекле, тик башҡорт теленә генә хас өндәр бар. Әгәр ниндәйҙер сит телде өйрәнһәң, икенсеһен өйрәнеүе тағы ла еңелерәк. Өсөнсө сит ил теле тағы ла еңелерәк биреләсәк. Был - иҫбатланған факт. Мин тағы ла шул турала уйланғаным бар: эшкә урынлашҡанда ниндәй сит ил теле белеүҙе һорайҙар, ә бына башҡорт телен белеү-белмәү менән берәү ҙә ҡыҙыҡһынмай. Әгәр Башҡортостанда йәшәйбеҙ икән, эшкә алғанда башҡорт телен белеү-белмәү ҙур әһәмиәткә эйә булһа, уның кәрәкме-түгелме икәнлеге тураһындағы һорау тормаҫ та ине, моғайын. Башҡорт теле дәүләт теле булһа ла, ул һаман да дәүләт теле кимәленә күтәрелеп етмәгән, шуныһы йәл.

**Азалия:** Бында иң беренсе урында ғаиләләге тәрбиә тора. Ата-әсәләр бәләкәй саҡтан уҡ башҡортса шиғырҙар, йырҙар, әкиәттәр һөйләп үҫтерә икән, бала шул ваҡыттан уҡ башҡорт телен яратып үҫәсәк. Шулай уҡ төрлө саралар ҙа ҡатнашырға, күберәк әҙәби әҫәрҙәр уҡырға кәрәк, тип уйлайым. Әлбиттә, мәктәп әсә телен, туған телде үҫтереүҙә, камиллаштырыуҙа ҙур роль уйнай, бында беҙ уның нескәлектәренә төшөнәбеҙ.

**Гүзәл:** Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Тамыр" балалар студияһының башҡортса күп программалары бар һәм улар балаларҙа әсә теленә һөйөү тәрбиәләй, уларҙың рухын күтәрергә ярҙам итә. Бәләкәстәр был тапшырыуҙарҙы ихлас, кинәнеп, яратып ҡарай. Шунан сығып фекер йөрөткәндә, заманса технологиялар ныҡ үҫешкән ваҡытта йәшәйбеҙ. Хатта бәләкәй генә балалар ҙа компьютерҙы үҙҙәре тоҡандырып, унда йәнһүрәттәр ҡарай. Уларҙа башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу арттырыу өсөн компьютерҙарҙы башҡортса "һөйләштерергә" ине.

**Ғәзинур:** Мин дә телде өйрәтеүсе төп мөхит ғаиләлә тип уйлайым. Шуға һәр ата-әсә, олатай-өләсәйҙәр араһында аралашыу теле башҡорт теле булырға тейеш, тием. Телебеҙҙән оялмай, дуҫтарыбыҙ менән аралашҡанда ла үҙ телебеҙҙә һөйләшһәк, уның перспективаһын күтәрһәк, телебеҙҙе һаҡлап ҡаласаҡбыҙ.

**▸ Һәр бала тыуғанда уҡ гений булып тыуа, әммә тормошта ололар гел тыйып, ҡурҡытып, "Теймә, ватаһың!", "Тотонма, бысратаһың!", "Тыңламаһаң, бабай алып китә!", "Ашамаһаң, бапаҡ килә!" тип, уларҙан ҡурҡаҡ йән һәм робот яһай, тигән фекергә ҡарашығыҙ?**

**Гөлназ:** Ә балаға бөтөн нәмәне эшләргә рөхсәт иткәндә лә, мәҫәлән, ват, ҡыр, емер, йыҡ тип торғанда ла унан яҡшы кеше сығыр тип уйламайым. Сөнки ул, тыйыу булмаһа, бөтөн нәмә рөхсәт ителә, тип өйрәнә бит. Был уның киләсәктәге тормошона ла хәүеф менән янай.

**Илнара:** Үҙемдән сығып әйтәм, балаға нимә тиһәң дә, ул киреһен эшләй. Теймә, тиһең икән - ул мотлаҡ тейә. Шуға ла ата-әсә тыйып түгел, ә тейһән, тотһаң, ватһаң нимә булырын ҡабаланмай ғына аңлатып тәрбиәләһә, бала үҙ фекерле булып үҫә. Бәләкәй сағымда мин гел әсәйем әйткәндең киреһен эшләй торғайным. Баланы тыймаһаң, ул донъяны үҙ тәжрибәһендә белеп, тойоп, аңлап үҫә. Киләсәктә унда ҡурҡыу хисе булмаясаҡ һәм ул һәр эшкә ҙур ышаныс менән тотонасаҡ, тип уйлайым. Сөнки күп тапҡыраҙар ҡабатлауға ҡарағанда, бер тапҡыр алған тәжрибә үҙмерә етә.

**Азалия:** Бәләкәй саҡтан артыҡ тыйылмай үҫһәк, беҙ икенсе төрлөрәк йәшәр инек, моғайын. Ҡыйыурыраҡ булыр инек, тип уйлайым. Ә беҙ үҙебеҙгә насар булһа булһын, башҡаға насар булып ҡуймаһын, тип ҡурҡабыҙ, сөнки беҙ әҙәпле, тәртипле, тыйнаҡ. Бер аҙ ҡыйыураҡ, дәртлерәк, сәмселерәк булырға кәрәк беҙгә. Ә был сифаттарҙы тап ана шул ата-әсәнең артыҡ тыйыуы үлтерә лә инде.

**Айҙар:** Бала саҡта мин эҫе сәйнүккә ҡулымды бешерҙем. Һәм икенсе тапҡыр уға яҡын да барманым, тотонманым, сөнки уның бешергәнен белә инем инде. Кеше психологияһы шундай, бер тапҡыр белгәс, башындан үткәргәс, икенсегә һинә ауыртыу йәки насарлыҡ тыуҙырған нәмәгә тотонмайһың. Мәҫәлән, розеткаға йәки электр приборҙарына яҡын барыуҙы тыймаһалар, икенсе тапҡырҙың булмауы ла мөмкин. Шуға был мәсьәлә ике яҡлы тип уйлайым. Әлбиттә, атай-әсәйҙең әйткәнен дә тыңларға кәрәк.

**Ғәзинур:** Атай-әсәйҙең, ғәҙәттә, балаларына ентекләп аңлатып ултырырға ваҡыты юҡ. Минеңсә, улар нимә ярай, нимә ярамай икәнен балаға яҡшы итеп аңлатырға тейеш.

**Гүзәл:** Бәлки, бала саҡтан уҡ күп тыйыуҙар арҡаһында беҙ үҙ фекеребеҙҙе әйтергә, үҙебеҙҙе яҡларға, хатта башҡортса һөйләшергә лә ҡурҡабыҙҙыр. Саманан тыш баҫалҡы, саманан тыш әҙәплебеҙҙер. Мәҫәлән, Кавказ халыҡтары Өфө урамдарында рәхәтләнеп үҙ телендә һөйләшә. Әлбиттә, беҙҙе лә берәү ҙә башҡортса һөйләшеүҙән тыймай, беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ тыябыҙ. Арабыҙҙа бер генә икенсе милләт вәкиле булһа, ул аңлаһын тип, уның телендә һөйләшә башлайбыҙ.

**▸ Бала теле менән хәҡиҡәт һөйләнелә, тигәндәй, баланы тыйып үҫтереүҙең ниндәй ҙур проблемаларға килтереүен бер аҙ асыҡлай төштөк. Ә бына бөгөнгө мәғариф системаһында һеҙгә нимә оҡшамай һәм нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

**Илнара:** Беҙҙең гимназияла өлкән синыфтар ирекле мәктәп формаһында йөрөй. Бының сәбәбе - формаларҙың матур, күркәле булмауындалыр, моғайын. Шуға мәктәп формаһы системаһы оҡшамай. Бер яҡтан, форманың дисциплинаға өйрәтеүе һәйбәт. Мәҫәлән, Англия мәктәптәрендә матур мәктәп формалары кейәләр, ә минә үҙебеҙҙең формалар оҡшамай: аҫ яҡ - аҡтан, аҫ яҡ ҡаранан булырға тейеш. Шуға хатта уны кейге лә килмәй. Икенсенән, мин профилле класта уҡыйым, ә яҡын дуҫтарым параллель кластарҙа уҡый. Шуға күрә дуҫтарым менән аралашырға тәнәфестәрҙе көтөп алам. Профилле класта дәүҙеселек ныҡ көслө, коллектив әллә ни татыу түгел, шуныһы оҡшамай. Һәйбәт яғы ла бар - профиль буйынса предметтарҙы яҡшыраҡ беләһең.

**Азалия:** Хәлемдән килһә, дәрестәрҙе оҙайлыраҡ итеп, тәнәфестәрҙең ваҡытын кәметер инем. Әлбиттә, ашап алырға ла ваҡыт кәрәк, әммә мәктәпкә бит ашарға түгел, уҡырға киләбеҙ.

**Айҙар:** Яңы мәғариф стандарттары буйынса, хәҙер физик культура дәрестәре аҙнаһына өс тапҡыр уҡытыласаҡ, тиҙәр. Был бик яҡшы. Юҡҡа ғына хәрәкәттә - бәрәкәт, тимәйҙәр бит. Әммә ҡайһы берәүҙәр әле үк, ул аҙнаһына ике тапҡыр уҡытылғанда ла, дәрескә инмәй ҡасып йөрөйҙәр. Физик культура дәрестәрен яратмайҙар. Был бик насар, минеңсә.

Шунан тағы дәрестәрҙең башланыу ваҡытын үҙгәртер инем. Дәрестәр иртән бик иртә башлана. Хатта уянып та өлгөрмәйбеҙ. Мин балаларҙы мәктәпкә көн яҡтырғас ҡына йөрөтөр инем. Беҙ бит уҡыуҙан тыш, тағы ла төрлө түңәрәктәргә, секцияларға йөрөйбеҙ, һуң ҡайтабыҙ, өйгә эш эшләйбеҙ, башҡа эштәр ҙә күп. Шуға ла һуң ятырға тура килә.

**Азалия:** Минең хәлемдән килһә, өйгә бирелгән эштең күләмен сиклер инем. Уҡыусылар 2-3 сәғәт дәрес әҙерләргә тейеш, тиҙәр, тимәк, беҙҙең бар ваҡытыбыҙ шуға китә. Мәғлүмәтте эшкәртеп тә, саф һауала йөрөп тә өлгөрмәйбеҙ. Һәм, әлбиттә, ултырғыстарҙы алмаштырыр инем, улар ҡаты түгел, йомшаҡ булһын ине. Сөнки беҙ бит дәрестәрҙә генә түгел, ҡайһы ваҡыт тәнәфестәрҙә лә бүлмәнән сыҡмай ултырабыҙ.

**Ғәзинур:** Минә контроль эштәрҙең бер көнгә тап килеүе оҡшамай. Мәҫәлән, бер көндә 5 дәрес булды икән ти, шуның өсөһөндә контроль эш эшләргә тура килгән саҡтар ҙа булғылай. Көсөргәнеш арта, ныҡ ауырға тура килә. Әйтәйек, бер үк көндә химиянан, алгебранан һәм физиканан контроль эш булһа - күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ инде.

(Дауамы 11-се биттә).

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# ҒАЙСА АҒАЙ ҺҮҘЕ...

## эйелмәҫ башты эйҙерер, толпарға йүгән кейҙерер



**Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов тураһында әллә күпме яҙырға һәм һөйләргә мөмкин. Әммә ошо премиялар эйәһе булыуы ғына ла уның осһоҙ эпитеттарға, ялтырауыҡлы һүҙҙәргә, дифирамбтар йырлауға мохтаж түгеллеген күрһәтә. Бөтә ғүмерен башҡорт филологияһының көнүҙәк мәсьәләләрен тикшереүгә арнаған ғалим, аҡыл, фекер эйәһе Ғайса Хөсәйенов төп эшмәкәрлегенән тыш, үҙен халҡының тоғро улы итеп тә танытты, милләтенең үҫеше өсөн күп көс һалды. Замандаштарының һүҙе - ошо хаҡта.**

**Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА, Башҡортостан Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы:** Ғайса Батыргәрәй улы тәү сиратта - ғалим-энциклопедист. Уның филология өлкәһен үҫтереүгә һалған хеҙмәте әле бер кем тарафынан да ҡабатланмаған, йәғни уның өлөшө бик ҙур. Жәлил Кейекбаев тел өлкәһенең барлыҡ йүнәлештәренә нигеҙ һалһа, фольклористикаға һәм әҙәбиәт ғилеменә Ғайса ағай нигеҙ һалған. Сөнки уның мәҡәләләре, башҡа фәнни, ҙур күләмле хеҙмәттәре беренсе урында тора. Тағы шуны билдәләп китергә кәрәк: Ғайса Батыргәрәй улы ҡулъяҙмалар фондын булдырыусыларҙың береһе. Әлбиттә, уға тиклем ҡулъяҙма байлығыбыҙҙың ниндәйҙер өлөшө йыйылғайны, әммә Ғайса ағай һәм уның уҡыусылары ауылдан-ауылға, өйҙән-өйгә йөрөп, баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле мираҫ йыйған. Улар беҙҙең ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана һәм хатта фондҡа Ғайса ағайҙың исемен бирҙек.

Ғайса Батыргәрәй улының уҡыусылары бихисап күп. Йәғни ул, ғалим, әҙәбиәт белеме, фольклор белеме, ҡулъяҙмалар буйынса белгес-текстолог ҡына түгел, ул - ғалим-уҡытыусы. Бөгөн ҡайһы ғына әҙәбиәтсе, фольклорсыны алма, улар барыһы ла Ғайса Хөсәйеновтың шәкерттәре. Ғалим-уҡытыусының фәнебеҙгә индергән өлөшө генә түгел, үҙе артынан килгән алмаш тәрбиәләүе лә бик ҙур әһәмиәткә эйә.

**Ғиниәт ҠУНАФИН, филология фәндәре докторы:** Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов беҙҙең хәҙерге әҙәбиәт ғилеме тарихында феноменаль күренеш. Ысынлап та, бер үҙе тиҫтәләгән ғалимдың эшен башҡарған, төрлө концепцияларға нигеҙ һалған кеше. Бигерәк тә башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыуҙың идеологы, инициаторы булыуы, яҙыуы менән тарихта ла, башҡорт әҙәбиәте ғилеме тарихында ла ҡалырға тейешле шәхес ул. Алты томлыҡ "Башҡорт әҙәбиәте тарихы" - ул башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш тарихын тарихи йәһәттән дә, теоретик йәһәттән дә яҡтыртыу юлында фундаменталь күренеш. Ул әҙәбиәт белгесе генә түгел, ысын мәғәнәһендә беҙҙең башҡорт гуманитар фәнендә культурология йүнәлешенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Был йүнәлештә ниндәй генә эш алып барманы ул. Әйтәйек, поэтика тураһында яҙа икән, ул этика өлкәһен дә, психология өлкәһен дә, этнография өлкәһен дә, тарих өлкәһен дә үҙ эсенә ала. Шунан сығып, беҙ уны башҡорт халҡын өйрәнеү фәне тигән ҙур системалы күренеште барлыҡҡа килтереүсе ғалим тип әйтә алабыҙ.

Тағы бер нәмә: һуңғы йылдарҙа ғалим әҙәбиәт теорияһы менән ныҡлап шөғөлләнеп китте. Әҙәбиәт теорияһы, теоретик поэтика, тарихи поэтика тураһында хеҙмәттәр яҙҙы. "Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге" тигән хеҙмәтен сығарҙы. Был хеҙмәттәрҙең асылы шунда: уларҙа беҙҙең көнсығыш тибындағы идея-эстетик фекерләүебеҙҙе, ҡараштар системаһын ул көнбайыш идея-эстетик фекерләү системаһы менән синтезлаштырҙы. Беҙҙең ике мәҙәниәт, ике фән араһында үҫешкән халыҡ булыуыбыҙҙы күрһәтеп биргән иғтибарға лайыҡ хеҙмәттәр булды улар.

Ғайса Батыргәрәй улы археография, йәғни иҫке ҡулъяҙма һәм иҫке баҫма китаптарҙы өйрәнеп, уларҙы туплап, системаға һалып өйрәнеү йүнәлешенә лә нигеҙ һалыусыларҙың береһе ул. Сөнки археографияһыҙ башҡорт әҙәбиәтенең тәрән тамырҙарын яҡтыртыу, сағылдырыу мөмкин булмаҫ ине. Шунан һуң тағы ла бер йүнәлеш - текстология. Әлбиттә, беҙҙә уға тиклем дә текстология тармағы булған. Әммә ләкин яңыраҡ баҫҡысҡа күтәреү, текстологияны фәнни йәһәттән нигеҙләү йүнәлешендә инициатор булып сығыш яһаған кешеләрҙең береһе булды Ғайса Батыргәрәй улы. Һөҙөмтәлә, беҙҙең әҙәби мираҫыбыҙҙы сағылдырған хеҙмәттәр күпләп донъя күрҙе. Аҡмуллабыҙ, Өмөтбаевыбыҙ, Риза Фәхретдиновыбыҙ тураһында хеҙмәттәр сыҡҡан, уларҙың әҙәби мираҫтары донъя күргән икән, быларҙың юл башында тороусыларҙың береһе Ғайса Хөсәйенов һәм уның шәкерттәре булды.

Халҡыбыҙҙың рухи мираҫын өйрәнеү, шул йүнәлештә эҙләнеүҙәр, археография, текстология йүнәлештәрен алып барыу эшмәкәрлеге ҙур ғалимға, әҙип-тарихсыға тарихи прозаға тотонорға этәргес бирҙе, "Ҡанлы 55", "Батырҙар ҡиссаһы" кеүек әҫәрҙәр яҙыуға өлөш индерҙе. Ижадта ул киң халыҡ массаһына художестволы-эстетик фекерләү, уның рухын күтәреү, унда тарихи аң тәрбиәләү, донъяға милли-философик фекер тыуҙырыу йүнәлешендә эштәр алып барҙы. Парсаларында ниндәй генә темалар, ниндәй генә проблемалар күтәрелмәй: әҙәп-әхлаҡ, зауыҡлыҡ, донъяға эстетик, сәйәси, философик ҡараш, донъяны танып-белеү. Хатта халыҡтың тапҡырлығы, шаянлығы, педагогикаһы ла сағыла парсаларында.

**Закир ЗИННӘТУЛЛИН, "Ватандаш" журналының баш мөхәррир урынбаҫары:** Ғайса Хөсәйенов "Ватандаш"тың 1996-2001 йылдарҙа баш мөхәррире булып эшләне һәм баҫманы ойоштороу эшендә иң ауыр бурысты үҙ иңенә алды. Нәҡ ошо йылдарҙа ул рубрикаларҙың йүнәлештәрен билдәләп, уға ысынлап нигеҙ һалыусы булды. Быға тиклем республикала гуманитар өлкәлә төрлө темаларға тәрән төшөп эшләгән баҫма юҡ ине. Журнал әҙәбиәт ғилеме, тарих, философия, социология йүнәлешендә эшләүгә ныҡлап тотоноп, ғәмәлдә популяр баҫмаға әйләнде. Һәм унда академизм менән популяр жанр үҙенсәлектәрен берләштереү мөһимлеге асыҡланды. Һәм ошо биш йыллыҡ эшмәкәрлеге тураһында үҙенең бер сығышында Ғайса Хөсәйенов шулай тип әйтеп үткәйне: "Ватандаш" журналы башҡорт халҡының һәм республика йәмәғәтселегенең ихтыяждарына һәм талаптарына ярашлы рәүештә, халҡыбыҙ тарихын, мәҙәниәтен, мәғрифәтен, фәнен, сәнғәтен, әҙәбиәтенең үҫеш юлдарын, сәйәси, социаль хәлен барлап, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса фекер алышып, киң мәғлүмәт биреү маҡсатында ойошторолдо. Уның халҡыбыҙ йөҙөн, һиммәтен, ҡаҙаныштарын танытыр абруйлы баҫма булып үҫешеүе шарт, бар донъяға башҡорт күҙлегенән, милләт үҫеше мәнфәғәтенән бағыуы мөһим". Уның ошо һүҙҙәрендә лә бар булмышы, милләтем, тип янып йәшәүе, халҡының тоғро улы булыуы асыҡ сағыла. Ул үҙен киләсәкте алдан күрә белеүсе, заман һулышын алдан тойоусы шәхес итеп танытты.

**Гөлназ ҠОТОЕВА, шағирә, Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты:** Ғайса Хөсәйеновтың "Заман. Әҙәбиәт. Әҙип" тигән китабы менән мәктәп йылдарында таныштым. Минең өсөн ул яңы донъя асты, киңерәк фекерләргә, өйрәнгән өлкәндә тәрәнерәк ҡаҙынырға өйрәтте. Әҙәбиәткә ылығырға этәргес бирҙе. Шуныһы ғәжәп, Ғайса Хөсәйенов тигән ғалимды, әҙипте ошо танышлығымдан башлап һаман да асам һәм уның аҡылының, белеменең тәрәнлегенә, ҡараштарының киңлегенә, йәштәрсә дәрт һәм дарман менән ижад итеүенә, егәрлелегенә, етеҙлегенә һоҡланып бөтә алмайым. Кеше ни хәтлем бөйөк булһа, шул хәтлем ябай, алсаҡ булалыр, тиеп уйлайһың Ғайса ағайға ҡарап. Бер ҡасан да тауышын күтәрмәҫ, мин-минлегенә бармаҫ, әммә уның әйтер һүҙе аҡһаҡалдарса һәлмәк һәм ваҡытлы, әҙәбиәттең киләсәгенә хәстәрлекле, һиҙгер. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, академик Ғайса Хөсәйенов үҙе бер сығышында "Алтмышта - ашығырға, етмештә етешергә кәрәк" тигәйне. Ҡартлыҡ тигән төшөнсә бындай кешеләргә ҡағылмай кеүек. Үҙенең һикһәнен ваҡлағанында ла уның һүҙе эйелмәҫ башты эйҙерер, толпарға йүгән кейҙерер.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡулдан ашатыу ҡош үҙенең хәле менән тулыһынса килешкәнгә тиклем дауам иткән. Һуңынан һунарсы уны тәүҙә яҡын аранан осоп килеп ҡулына ултырырға мәжбүр иткән. Яйлап ара йыраҡлаша барған. Алдатҡыс сифатында ул ит киҫәге тотҡан, һуңынан уны ҡоштарҙы алдау өсөн эшләнгән махсус шаҡылдатҡыс йәки һыҙғыртҡыс менән алмаштырған. Ыласынды өйрәтеү барышында беренсе тәүлектә башҡорттар уны арытырға, ял итергә ваҡыт бирмәҫкә була бер минутҡа ла ҡулдарынан төшөрмәгән. Ҡош тамам ҡулға эйәләшеп, беренсе саҡырыуға уҡ килеп етә икән, шул ваҡытта ғына уны һунарға алып сыҡҡандар.

Аусы ҡоштоң аяғына ҡыҫҡа ғына ҡайыш, тышау кейҙерелеп, оҙон арҡан менән арҡанлап ҡуйылған. Аусы ҡоштар менән һунар итеү процесы ҡатмарлы булмаған. Иртә таңдан йәки кисен ҡояш байыр алдынан аусы ҡоштары булған бер төркөм күл йәки һаҙлыҡ эргәһенә йүнәлгән. Һыу сығанағында өйрәк йәки ҡыр ҡаҙҙарын күреп ҡалһалар, бер нисә ыласынды осороп ебәргәндәр ҙә, үҙҙәре һай-һайлап шунда ҡарай сапҡан. Һирәк кенә һыбайлылар үҙҙәре менән эттәрҙе лә алған, улар үҙ сиратында күлгә йәки һаҙға инеп, ҡоштарҙы ҡурҡытҡан. Һауаға күтәрелгән ҡоштар артынан тағы бер ыласын осоролған. Ул ҡоштар тубын бейеккәрәк күтәргән. Шуны ғына көтөп торған һәм алдан ебәрелгән ыласындар тупты ҡыуып тотоп, уларға өҫтән таш кеүек ташланып, тәпәйҙәренең артҡы тырнаҡтары менән бәреп төшөргән. Бер-ике өйрәкте үлтергәс, ыласын үҙенең ҡорбаны эргәһенә төшкән һәм уның баш һөйәген ватып, мейеһен эскән. XX быуат башына инде ыласын һунары тулыһынса тиерлек юҡҡа сыҡҡан.

XVII-XVIII быуаттарҙа башҡорттарға балыҡсылыҡтың камиллашҡан балыҡ тотоу ҡоралдары ҡулланылған барлыҡ төп ысулдары ла билдәле булған. Был ҡоралдар менән арендаторҙар ғына түгел, башҡорттар үҙҙәре лә файҙаланған. Улар балыҡты һалдау, йылтырма, йылғаның йәки күлдең айырым участкаларын быуып ҡуйып, ҡармаҡ һ.б. ысулдар менән тотҡандар.

Башҡорттарҙа балыҡты келә менән тотоу йыш күҙәтелә. Келәнең иң ябайы булып һеүән тора. Ул йылғаны быуып тороусы һәм түбәһе менән йылғаның ағымына ҡарап торған ситәнде кәүҙәләндерә. Балыҡ йылға үренә үрләгәндә ошо ситәнгә тулған һәм балыҡсылар уларҙы сак менән һөҙөп алған. Ситәндең икенсе ҡоролмаһы нәрәтә тип аталған һәм уны бик йыш тау йылғаларында күрергә мөмкин булған (һүрәт).





Аҡмай ятҡан һыу сығанаҡтарында, күлдәрҙә һәм быуаларҙа нәрәтә урынына ыйсуҡ (котцы) ҡуйылған (һүрәт). Башҡорттарҙа мурҙаның төрлө төрҙәре булған: талдан үрелгән мурҙа, нәрәтә, йоп битәл.

*✓ Мин "шул милләттән" тип танау күтәреп, буш биҙрә кеүек ҡауылдап йөрөгәнсе, ниндәйҙер аныҡ эш эшләргә һәм үҙеңдең яуаплылығың, эшһөйәрлегең, илһөйәрлегең менән милләтеңде танытырға кәрәк, тигән фекерҙәмен.*

**Күп кеше менән аралашырға тура килә. Төрлө йәштәгеләр һәм төрлө вазифа биләүселәр бар улар араһында. Ләкин бик һирәктәре менән генә аралашыуҙан йәм табаһың. Буш һүҙ һөйләүҙән һәм тыңлауҙан, әһәмиәтһеҙ һәм кәрәкһеҙ бәхәстәрҙән арыған саҡта бөгөнгө әңгәмәсем кеүек аралашыуға яңы һулыш өргән кешеләрҙең килеп сығыуы ҡыуаныслы. Әлеге ваҡытта Төркмәнстандың баш ҡалаһы Ашхабадта нефть сығарыу өлкәһендә инженер булып эшләп йөрөүсе Марат Рәмил улы ФАЗЛЕТДИНОВ атлы егет булыр ул.**

# ТӘЖРИБӘ ТУПЛАҒАНДАН ҺУҢ...

## тыуған яҡтарға ҡайтасаҡмын

### Рухи тәрбиә - нығлы үҙәк

Тормошта үҙеңдең лайыҡлы урыныңды табыуҙа ғаиләнең әһәмиәте ҙур. Ғаиләләге тәрбиә, тәү сиратта, рухлы булырға тейеш, сөнки нығлы рухлы кешенең үҙәге нығ була һәм ниндәй хәлдә лә юғалып ҡалмай. Был йәһәттән мин үҙемде бәхетлемен, тип әйтә алам. Атай-әсәйем беҙгә, миңә һәм һеңлемә, халҡыбыҙҙың йырмоңдарын ишеттереп, тел байлығын һеңдереп, тыуған ергә һәм туған телгә һөйөү һәм ихтирам тойғолары һеңдереп үҫтерҙе. Әлеге ваҡытта, ҡыҙғанысҡа күрә, башҡорт телендә аралашыуым сикле, шулай ҙа уны онотмайым һәм уңайы тура килгән һайын телмәремдә ҡулланам. Улыма ла башҡорт телендә әкиәттәр һәм йырҙар тыңлатам. Был йәһәттән Башҡортостанда, башҡорт мөхитендә йәшәүсе балалар бәхетле, сөнки улар телде балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә үҙләштереүҙе дауам итә, ә өйҙә инде алған белемдәрен нығытып ҡуя. Тик бөгөнгө көндә күптәрҙең ошоно аңламауы һәм балаһын тик урыҫ телле итергә тырышыуы хәүефләндерә. Балаһына туған телен, халҡының тарихын, фольклорын, йола-ғәҙәттәрен, йырҙарын өйрәтеү һәр кемдең бурысы, тип иҫәпләйем.

### Белемде ғәмәли яҡтан нығытыу мөһим

Мәктәп кешенең тормошонда ҙур роль уйнай, сөнки бала әллә күпме ғүмерен унда үткәрә. Баланың физик яҡтан ғына түгел, ә психологик яҡтан да тулыһынса формалашҡан шәхес булыуында мәктәп йылдарының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ икәнлеген инҡар итеп булмай. Нәҡ унда унең аралашыу ҡеүәһе нығый, үҙенең фекерен әйтергә, ә башҡаларҙыҡын тыңларға өйрәнә. Үҙем Учалыла 8 синыф тамамлағандан һуң, Өфөләге ул саҡтағы Башҡорт-төрөк лицейына уҡырға килдем. Был аҙымды мин төплө уйлап, барыһын да үлсәп, уйлап яһаным. Бында уҡыуым миңә нимә бирҙе? Тәү сиратта, яңы кешеләр менән танышыу, аралашыу мөмкинлеге алдым. Лицейҙа мин үҙ һүҙем, эшләгән эшем, аҙымдарым өсөн яуап бирә алырҙай ир-егет булып нығындым, дуҫтар таптым. Шулай ҙа лицей стеналарында үткән 4 йыл ғүмеремдең иң яҡшы һөҙөмтәһе тип инглиз һәм төрөк телдәрен юғары кимәлдә үҙләштереү, тип һанайым. Был телдәрҙе белеүем миңә һәр саҡ ярҙам итә.

Мәктәптән һуң Өфө дәүләт нефть техник университетында белем алдым һәм әлеге ваҡытта нефть өлкәһендә эшләйем. Ниндәйҙер һөнәрҙе үҙләштереү, минеңсә, бары тик уның нескәлектәрен өйрәнеүгә генә ҡайтып ҡалырға тейеш түгел, тәү сиратта, уны ошо өлкәлә эшләү өсөн яраҡлаштырыу мөһим. Ғөмүмән, ниндәй уҡыуҙы алһаң да, ул бары тик теге йәки был һөнәрҙең нигеҙҙәрен генә бирә, ә ысын мәғәнәһендә үҙ эшеңдең оҫтаһы булыу өсөн тормош мәктәбен үтеү, һөнәреңдең бар нескәлеген донъяуи ваҡиғалар ярҙамында аңлау мөһим. Дөйөмләштереп әйткәндә, юғары уҡыу йортонда алған теоретик белемде практик йәһәттән нығытыу һәм камиллаштырыу мөһим. Әлеге ваҡытта мин нәҡ ошо юҫыҡта эшләйем дә инде. Алыҫ Сахалинда башланған хеҙмәт юлымды Иркутск ҡалаһында, бөгөн иһә Ашхабадта дауам итәм. Эшем миңә шәхес буларак үҫеү, төрлө ерҙәрҙе һәм илдәрҙе күреү һәм хатта унда йәшәү мөмкинлеге биреүе менән оҡшай.



*Беҙҙең илдә лайыҡлы эш урыны табыу өсөн "кәрәкле" ғаиләлә тыуырға, "әһәмиәтле" туғандарға эйә булырға кәрәк. Ә сит ил компанияларында быға үтә ныҡ әһәмиәт бирмәйҙәр, иң беренсе кешенең үҙенә ҡарайҙар, уның шәхесенә иғтибар итәләр. Кешенең тырышлығы, үҙ-үҙен үҫтереү теләге күҙгә ташланып торған сифаттар һәм сит ил компанияһына эшкә урынлашыу өсөн күп осраҡта ошолар етә. Дөйөмләштереп әйткәндә, уларға һинең милләтең дә, эш тәжрибәң дә, юғары вазифа биләгән туғаның да, абруйлы һаналған уҡыу йортоноң дипломы ла мөһим түгел. Сит ил компаниялары һәләтле белгестең яҡшы килем килтерәсәген төптән аңлай һәм ошо юҫыҡта уңышлы эшмәкәрлек алып бара.*

### Шәхес булыуҙың мөһимлеге

Бөгөн һәр кемдең төрлө юғары уҡыу йорто тамамлап та, эш таба алмаған таныштары бихисап. Илдең эшләп йөрөүсе ҡатламына инеп китеү өсөн йәштәргә әллә күпме юл үтергә, күңеленә оҡшаған эш тапҡансы, бихисап ваҡыт юғалтырға кәрәк. Рәсәйҙә эшкә урынлашыу, күп осраҡта, таныш-туғанлыҡҡа бәйле. Йәш белгестән хеҙмәт тәжрибәһе таптырыу ҙа Рәсәй өсөн сит күренеш түгел. Ғөмүмән, беҙҙең илдә лайыҡлы эш урыны табыу өсөн "кәрәкле" ғаиләлә тыуырға, "әһәмиәтле" туғандарға эйә булырға кәрәк. Ә сит ил компанияларында быға үтә ныҡ әһәмиәт бирмәйҙәр, иң беренсе кешенең үҙенә ҡарайҙар, уның шәхесенә иғтибар итәләр. Кешенең тырышлығы, үҙ-үҙен үҫтереү теләге күҙгә ташланып торған сифаттар һәм сит ил компанияһына эшкә урынлашыу өсөн күп осраҡта ошолар етә. Дөйөмләштереп әйткәндә, уларға һинең милләтең дә, эш тәжрибәң дә, юғары вазифа биләгән туғаның да, абруйлы һаналған уҡыу йортоноң дипломы ла мөһим түгел. Эшһөйәр, тырыш эшсене компания күрә һәм артабан үҙ аҡсаһына уҡытып, теге йәки был өлкәлә үҙ эшенең оҫтаһы булған белгес итеп әҙерләү өсөн бар тырышлығын һала. Сит ил компаниялары һәләтле белгестең яҡшы килем килтерәсәген төптән аңлай һәм ошо юҫыҡта уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Һәм, тәбиғи, компания өсөн файҙалы белгес үҙе лә ҡыйырһытылмай, ә башҡарған эшенә ҡарап, лайыҡлы эш хаҡы ала.

### Сит илдәрҙе күр ҙә, үҙ илеңдә йәшә

Эшем буйынса ла, сәйәхәт итеп тә күп сит илдәрҙә булырға тура килде. Англия, Америка һәм Францияла белемемде камиллаштырҙым, ә Бельгия, Төркиә, Таиланд, Испания буйлап сәйәхәт итеү мөмкинлеге тейҙе. Эшем буйынса Рәсәйҙең дә төрлө ҡалаларында булдым. Сит ерҙәрҙе күреү, унда бер аҙ йәшәп алыу кешенең үҫешенә, донъяға ҡарашын формалаштырыуға, тәжрибә туплауға ҙур этәргес көс булып тора. Мин, мәҫәлән, үҙемдең Рәсәй ҡалаларында ғына түгел, ә сит дәүләттәрҙә эшләү мөмкинлегемде нәҡ ошолай ҡабул итәм һәм етерлек тәжрибә туплағандан һуң, тыуған яғыма ҡайтып, республикама, халҡыма кәрәкле һәм файҙалы кеше булырмын, тип уйлайым. Сит ҡалала йәки сит илдә бер аҙна булғандан һуң барыһы ла ялҡыта һәм тыуған яҡҡа ҡайтҡы килә башлай, ләкин һағыныу хистәрен эш менән баҫам. Үҙемдең бөгөн туплаған белемем киләсәктә республикама файҙа килтерәсәген аңлау ҙа хәлемде еңеләйтә.

Ғөмүмән, һәр кемдең күңелендә, әлеге ваҡытта ҡайҙа ғына ғүмер итмәһен, тыуған яғына булған һөйөү йәшәй. Тәү башлап аяҡ баҫҡан тупраҡ иң йомшағы һәм ундырышлыһы, бала саҡта һулаған һауа иң саф һәм таҙа булып тойолоп, кешене ғүмер буйы оҙатып йөрөүенә шикләнмәйем. Мин дә үҙемдең тыуған яғым - йәмле Учалы яҡтарын бер ҡасан да онотмайым һәм уның хаҡындағы матур хәтирәләрҙе оло йылылыҡ менән күңелдә йөрөтәм. Был тойғолар миңә көс бирә, дәрт өҫтәй, ҡеүәтемде арттыра.

### Ҡайҙа йәшәүең түгел, кем булыуың мөһим

Ниндәй илдә йәшәһәң дә үҙ халҡыңдың улы булып ҡалыу, кешелек йөҙөңдө юғалтмау мөһим. Мин "шул милләттән" тип танау күтәреп, буш биҙрә кеүек ҡауылдап йөрөгәнсе, ниндәйҙер аныҡ эш эшләргә һәм үҙеңдең яуаплылығың, эшһөйәрлегең, илһөйәрлегең менән милләтеңде танытырға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Теге йәки был халыҡ тураһындағы фекер бихисап төрлө бәләкәй генә нескәлектәрҙән сығып билдәләнә, шуға күрә, һәр кемгә ғәҙеллек, намыҫлылыҡ, әҙәплелелек тойғолары ят булмаһа, уның халҡы тураһында ла матур уйлаясаҡтар. Тирә-яҡтағылар һине нисек ҡабул итә - бына шуныһы мөһим. Ҡайһы берәүҙәрҙең йәмғиәт алдында ниндәй булып күренеүе хаҡында уйлап та ҡарамай, әллә ниҙәр ҡыланыуы башҡаларҙа тотош халыҡ тураһында фекер туплауға килтерә. Шуныһы ҡыҙғаныс. Башҡорттар элек-электән аҡыллы, тотанаҡлы, уйлап эш итеүсе, азат рухлы халыҡ булған. Бөгөн беҙҙең алда ошо уҡ сифаттарҙы юғалтмау һәм үҙебеҙҙе башҡалар алдында абруйлы итеп күрһәтеү бурысы ята. Мин үҙемде ысын башҡорт, тип иҫәпләйем һәм ҡайҙа ғына булһам да ғорурлыҡ менән милләтем, тарихым, халҡымдың билдәле шәхестәре тураһында һөйләйем.

### Ваҡыт ҡәҙерен ситтә яҡшыраҡ аңлайһың

Ситтә йәшәгәндәр ваҡыт ҡәҙерен яҡшыраҡ аңлай, ми-

неңсә. Бер секундҡа ла туктамаған ваҡыт шул ҡәҙәре тиҙ үтә һәм атай-әсәй, яҡындарың менән аралашыу өсөн бирелгән ваҡыттың да мәңгелек түгел икәнлеген асығыраҡ тоя башлайһың. Ҡырҙа яҡындарыңды ғына түгел, ә тыуған йорттоң йылылығын, тәбиғәтте, хатта күңелгә яҡын әйберҙәрҙе лә һағынаһың, юҡһынаһың. Бына ошо һағыныу тойғоһон уятыуы менән дә ситтә йәшәү фәһемлелер, тип уйлайым. Ситкә китмәгән кеше быны аңлай һалып бармай һәм ҡәҙерен дә белмәй. Мәҫәлән, мин Башҡортостандан әллә нисәмә мең саҡрым алыҫта йәшәһәм дә мөмкинлек сыҡҡан һайын ғаиләм менән республикаға, атай-әсәй янына ҡайтырға тырышам, ә ҡайһы бер таныштарым яҡындары менән аралашыу бәхетен кисектереп, айҙар-йылдар буйы ҡайтып та күренмәй. Аҙаҡ үкенеүҙәр килер, ләкин һуң булыуы күңелде әрнетер. Шуға күрә, ваҡыттың ҡәҙерен беләйек һәм уны дөрөҫ ҡулланайыҡ, тип әйткем килә. Бөгөнгө көндә райондан районға ғына түгел, ә ер шарының бер осонан икенсеһенә әләгеү ҙә әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Шуға күрә, транспортты һәм маршрутты дөрөҫ һайлағанда, ара алыҫлығы проблема түгел. Теләк кенә кәрәк.

### Лидерҙарҙың да төрлөһө була

Лидерҙар һәр саҡ булған һәм бөгөн дә бар. Ләкин улар араһында ысындарын һәм ялғандарын айырыу ауыр. Ялғандары һәр ергә лә инергә тырышып, ҡыҫылып, үҙҙәренең мөһимлеген күрһәтергә тырыша, ә ниндәйҙер ауырлыҡ килеп сыҡҡанда, юҡҡа сыға, һабын ҡауығы кеүек шартлай. Бына ошондай ваҡытта ысын лидерҙарға юл асыла ла инде. Улар үҙ өҫтәренә яуаплылыҡ алырға ҡурҡмаған, үҙҙәрен ныҡлы эске контролдә тота белгән һәм айыҡ аҡылға эйә булған кешеләр. Лидерлыҡтың тағы бер айырылғыһыҙ сифаты - башҡаларҙы үҙенең дөрөҫлөгөнә ышандыра белеү оҫталығы. Шулай итеп, аҡыллы, эске көсәре ныҡ, рухи яҡтан көслө, зиһенле, фекерле, һүҙгә оҫта кешенен лидер булып китеүе тәбиғи, тип уйлайым. Ошондай сифатҡа эйә милләттәштәрем күп, тик ул сифаттарҙы ойотмаҫҡа кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһы берәүҙәрҙең бөгөнгө көн йәштәрен ялҡау, булдыҡһыҙ, маҡсатһыҙ, рухһыҙ һәм әҙәпһеҙ итеп күҙ алдына баҫтырырға тырышыуы Марат Фазлетдинов кеүек егеттәргә "бәрелеп", селпәрәмә килә. Был тормошта үҙенең нимә теләгәнен яҡшы белгән һәм ошо юҫыҡта ышаныслы, ныҡлы аҙымдар менән атлаған йәштәребеҙ күп беҙҙең. Уларҙы бары тик күрә белергә һәм изге маҡсаттарын ысынбарлыҡ итеүҙә ярҙам күрһәтеү генә кәрәк.**

**Наҙгөл МАНАПОВА яҙып алды.**

# АЛДАМА, УРЛАМА, ХАРАМЛАШМА!

## Уңышлы эшҡыуарлыҡ нигеҙе былар

**Эшҡыуар тигәндә күҙ алдына олпатлығы йөҙөнә сыҡҡан, үҙ дәрәжәһен белеп кенә һөйләшкән, донъя дилбегәһен күптән һәм ысҡындырмаҫлыҡ итеп ҡулына урап тотҡан олораҡ йәштәге ир-егет йәки ҡатын-ҡыҙ күҙ алдына баҫа. Ләкин бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, был ҡараш юҡҡа сыға бара, сөнки бөгөнгө эшҡыуарҙар араһында дарманлы, дәртле, хәүефтең күҙенә тура ҡарарлыҡ йәштәр ҙә бихисап. Тормош тәжрибәләре самалы булһа ла, заман талабына яуап бирерлек эшмәкәрлек ҡороп, ғаиләһенә абруйлы тормош бүләк итә алғандарҙың күп булыуы ҡыуаныслы. Ошондай егеттәрҙең береһе - "Сруб-монтаж" фирмаһы етәксеһе Айнур ҠЫЛЫСОВ. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ йәш эшҡыуарҙың эшмәкәрлеге хаҡында.**



### Эшҡыуарлыҡ - Алланың әмере

Эшҡыуарлыҡ, шәхси эшҡыуар хаҡында төрлө фекерҙәр ишетергә була. Төптән уйлап ҡарағанда, уларҙың барыһы ла дөрөҫ кеүек. Ысынлап та, әгәр ҙә һәр айырым кеше эшҡыуарлыҡты үҙенсә күрә, аңлай һәм ҡабул итә икән, тимәк, был фекерҙәң донъяла йәшәргә хоҡуғы бар. Минә ҡалһа, эшҡыуарлыҡ - ул Алла әмере. Шуға күрә, эшҡыуарлыҡты бары тик кешенән, уның теләгенән һәм мөмкинлегенән генә тора, тип иҫәпләмәйем. Эшҡыуарлыҡта, иң мөһиме, шәриғәт ҡушҡан ҡанундарҙан ситләшмәҫкә кәрәк. Ниндәй генә өлкәлә эшмәкәрлек алып барһаң да, харам менән бәйле булмау, алдамау, урламау, үҙ эшеңде ерена еткереп намыҫлы башҡарыу, харамлашмау - быларҙың барыһы ла уңышлы эшҡыуарлыҡтың нигеҙе, тип уйлайым. Ғөмүмән, был сифаттар эшҡыуарлыҡта ғына түгел, ә һәр кешенең көндәлек тормошонда булырға тейештер, тиген фекерҙәмен. Тәжрибәле кешеләрҙең аҡыллы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыу ҙа эштең яйлы барыуында оло әһәмиәткә эйә. Шулай уҡ яныңдағы кешеләргә ышаныс күрһәтә белеү сифаты ла күпте бирә. Ләкин, эшҡыуармын, тип, ғаиләһен, яҡындарын, дуҫтарын оноткан, бар ваҡытын һәм көсөн тик килем алыуға ғына йүнәлткән кешене уңышлы, тип әйтә алмайым, сөнки күңел тулылығын, уның бөтөнлөгөн, тулы бәхетте матди байлыҡ түгел, ә нәҡ яҡындарың бүләк итә.

> ***Миңә ҡалһа, эшҡыуарлыҡ - ул Алла әмере. Шуға күрә, эшҡыуарлыҡты бары тик кешенән, уның теләгенән һәм мөмкинлегенән генә тора, тип иҫәпләмәйем. Эшҡыуарлыҡта, иң мөһиме, шәриғәт ҡушҡан ҡанундарҙан ситләшмәҫкә кәрәк. Ниндәй генә өлкәлә эшмәкәрлек алып барһаң да, харам менән бәйле булмау, алдамау, урламау, үҙ эшеңде ерена еткереп намыҫлы башҡарыу, харамлашмау - быларҙың барыһы ла уңышлы эшҡыуарлыҡтың нигеҙе, тип уйлайым. Ғөмүмән, был сифаттар эшҡыуарлыҡта ғына түгел, ә һәр кешенең көндәлек тормошонда булырға тейештер, тигән фекерҙәмен. Тәжрибәле кешеләрҙең аҡыллы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыу ҙа эштең яйлы барыуында оло әһәмиәткә эйә. Шулай уҡ яныңдағы кешеләргә ышаныс күрһәтә белеү сифаты ла күпте бирә.***

### Һәр эшсе - фирманың йөҙө

Эшҡыуарлыҡҡа кеше төрлөсә килә. Шәхсән үҙем был өлкәлә 2009 йылда атайымдың кәңәшен тотоп, уның оҫталығына таянып эш башланым. Ғөмүмән, һәр башланғыста ла яҡындарыңдың ярҙамын тойоу ҙур этәргес булып тора, кәсҡеүәт өҫтәй, ярҙам итә. Үҙемде бил йәһәттән бик тә уңышлымын, тип иҫәпләйем һәм яҡындарыма ярҙамдары өсөн рәхмәтемде белдерәм.

Беҙҙең төбәк ҡуйы урмандар иле, шуға күрә иғтибарымды ағасҡа, йәғни ағас менән бәйле тәҙәлөшкә йүнәлттем. Ваҡыт үткән һайын был ҡарарымдың дөрөҫлөгөнә инанам, сөнки эшем ырамлы һәм уңышлы бара, клиенттарым етерлек. Артабан да ошо өлкәлә ең һыҙғанып эшләргә һәм яңы үрҙәр яуларға ниәтләйем. Әлеге ваҡытта фирмала даими рәүештә 15 кеше эшләй, ләкин заказдар күбәйгән осраҡта йәки клиент ниндәйҙер бураны тиҙ эшләп биреүҙе һорағанда өҫтәмә эшселәр йәлеп итәм. Һәр эшсе - ул фирманың йөҙө, шуға күрә һиналған, ышаныслы кешеләр менән эш итеүҙе ҡулайлы тип һанайым. Ошо йылдар эсендә республиканың төрлө райондарында эшләргә тура килде, шуға күрә теге йәки был төбәккә барғанда урындағыларҙы ла эшкә алам. Был ике яҡ өсөн дә отошло: мине әллә ҡайҙан эшселәр эҙләп, уларҙы алып килеп урынлаштырыу мәсьәләһенән ҡайғыртыуҙан азат итһә, урындағы оҫталарҙы эш менән тәьмин итә. Ҡулы оҫта, балта тота белгән ир-егеттәр бихисап ул ауылдарҙа, эште алға ебәреү өсөн уларҙың оҫталығын һәм тәжрибәһен ҡулланыу эште тиҙләтә һәм сифатлы итә. Ә беҙҙең эштә сифат - төп күрһәткес, сөнки тәҙәлөш өлкәһендә эшләүсе эшҡыуар үҙенә клиенттарҙы, күп осраҡта, "сарафан радиоһы", йәғни телдән-телгә күсеп йөрөүсе иғландар аша таба. Шуға күрә, кемгәләр сифатһыҙ бура эшләп бирһәң, ул таныштарына бер ҡасан да һинең фирманы тәҡдим итмәйәсәк, тимәк, мин һәм минең эшселәрем заказһыҙ ҡала, тигән һүҙ. Быға юл ҡуйырға ярамай. Ғөмүмән, минең эштәге төп принцибым - клиенттың эшем менән ҡәнәғәт ҡалыуы һәм минең хаҡта яҡшы уйҙа булыуы. Шуға күрә эште һәр саҡ урын еренә еткереп, матур һәм яҡшы итеп башҡарырға тырышам.

### Ағас - кешелеккә бирелгән ҙур бүләк

Әлеге ваҡытта өй йәки башҡа кәрәкле кәртә-ҡура эшләү өсөн заманса материалдар күп, ләкин ағасҡа еткәне юҡ, минеңсә. Экологик яҡтан таҙа, сифатлы, файҙалы ағас өйҙә йәшәү күпкә өҫтөнөрәк. Быны бик күптәр аңлай һәм тәҙәләштә ағасты ҡулланырға тырыша. Мәҫәлән, ҡыйбатлы фатир һатып алырлыҡ аҡса йыя алмайынса, торлаҡ мәсьәләһен шәхси йорт һалып сығыуҙа күргән күпселек йәштәр нәҡ ағастан эшләнгән өйҙәрҙе хуп күрә. Шулай уҡ ҡала фатирҙарында йәшәүселәр ҙә, таш диуарҙар буумаһынан ялҡып, баҡсаларындағы өйҙәрен һәм мунсаларын ағастан һалдыра. Йылдан-йыл ағас һатып алыу мәсьәләһе киҫкенләшә бара, ләкин ҡул ҡаушырып, ауыр уйҙарға бирелеп ултырмаһаң, барыһын да хәл итергә була. Шулай ҙа эш барышында алдыңа ниндәй генә юғары маҡсаттар ҡуйма, тәбиғәт хаҡында онотторға ярамай. Ағас - Аллаһы Тәғәләнең кешелеккә биргән ҙур бүләге. Шуға күрә уның менән, ғөмүмән, тәбиғәттең һәр байлығы менән бик һаҡ эш итергә кәрәк. Тәбиғәтте рәнйетеү, тәләфләү, уның байлығын ҡомһоҙланып ҡулланыу мөмкин булмаған эш.

### Кеше менән эшләй белеү - уңыштың яртыһы

Эш буйынса төрлө кешеләр менән осрашырға тура килә. Клиенттарҙы аныҡ рәүештә ниндәйҙер төркөмгә бүлеп булмай - һәр кешенең үҙ фекере, талабы һәм тәрбиәһе. Ниндәйҙер аңлашылмаған мәлдәр килеп тыуған ваҡытта кемдер мәсьәләне тыныс ҡына хәл итә, ә икенсе берәү, халыҡ әйтмешләй, "себенде филгә әйләндерә". Ләкин һәр кем менән уртаҡ тел табыу һәм эште аҙағына тиклем алып барып еткереү - минең тәүбурыстарымдың береһе. Әлегә тиклем, әйтергә кәрәк, минә үтә ҡатмарлы клиенттар осрағаны булманы, бынан һуң да ундайҙарҙан Хоҙай аралар, тип ышанам. Бөгөн күптәр йомошон нисек тә булһа арзан хаҡҡа үтәтергә тырыша һәм ҡайһы саҡта намыҫһыҙ кешеләр ҡулына барып эләгеп, матди һәм әхлаҡи яҡтан зыян күрә. Миңә ҡалһа, кешенең ышанысын һәм хөрмәтен юғалтыу эшҡыуарлыҡта иң ҙур зарарҙың береһе. Ул, беренсенән, артабанғы эштә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ, икенсенән, кемделер алдау - оло гонаһ.

Эшҡыуарлыҡтағы конкуренлыҡ тәшәнсәһенә лә тыныс ҡарарға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Әгәр ҙә һәр кем үҙ эшен яҡшыраҡ итергә, сифатлыраҡ башҡарырға тырыша икән - бында бер хилафлыҡ та күрмәйем. Ә конкурентлыҡ нәҡ сифатлылыҡты тәьмин итеүсе һәм, тәбиғи, эшҡыуарлыҡты алға ебәреүсе көс ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нәк бөгөнгө әңгәмәсебеҙ кеүек кешеләр динле булыуҙың бары тик бер йүнәлештә генә йәшәүҙе аңлатмауын һәм ҡараштар тарлығын билдәләмәүен, диндең һәм йәмғиәттең бер бөтөн булып йәшәй алыу мөмкинлеген аныҡ аңлата. Улар матур итеп ғаилә ҡора, балалар үҫтерә, үҙ эшен булдыра, ғөмүмән, беҙ ғәҙәти күргән донъянан ситләшмәй һәм уны ят күрмәй. Матди байлыҡ тип рухи донъя хаҡында, иман тураһында онотмай йәшәүҙәре менән бәхетле улар.**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

✓ ***Артистарса килештереп, ҡулдарын йәйҙе. Туп-тура атлап килеп Зәлифәне бейергә саҡырҙы. Гипноз хәленә килгәндәй булған йәш ҡыҙҙың аяҡтары, гүйә, хужабикәһененең ихтыярынан тыш, уны бейергә алып төштө...***






Шәмбе көндәре улар йәшәгән биш ҡатлы дөйөм ятаҡтың беренсе ҡатындағы зур ғына залында дискотека ойошторалар. Килгәненә дүрт-биш ай самаһы үтеүгә ҡарамаҫтан, Зәлифә ундай-бындай кисәләргә йөрөүҙе әллә ни хушһынманы. Ә был юлы, дискотекаға барырға теләге булмаһа ла, Сәлимә әхирәте, йәнә электән бында эшләгән яҡташы - Мәймүнә исемле ҡыҙҙың ныҡлап өгөтләүенә ҡаршы тора алманы. Элегерәк урыҫ ҡыҙҙары менән бер бүлмәлә йәшәгән Мәймүнә, ятаҡ коменданты менән һөйләшеп, Зәлифәләр бүлмәһенә дүртенсе булып күсеп сыҡҡайны. Мотальщица тип аталған яңы һөнәрҙең һәр нескәлектәренә лә Зәлифә менән Сәлимәне ул өйрәтте. Тәүге көндән үк үҙе янына өйрәнсек итеп эшкә беркетелгән мөләйем, ябай ҡыҙҙарҙы шундуҡ оҡшатҡайны. Сығышы күрше районда булған был зәңгәр күҙле, һары сәсле алсаҡ башҡорт ҡыҙы инде егерме етенсе йәш менән барыуына ҡарамаҫтан, һаман да кейәүҙә түгел. Танышҡан көндө үк улар, әллә ҡасандан бергә йәшәгән әхирәттәрҙәй, һин дә мин аралашып, һөйләшеп алды ла киттеләр. "Һине Хәбир ағайыма еңгәй итеп тә алырмын әле", - тип Зәлифә хатта Мәймүнәне шаяртып та алғайны.

Сираттағы шәмбе көндәренең береһендә, инде яҡын дуҫына әүерелгән Мәймүнә Зәлифәне өгөтләргә тотондо:

- Әйҙә инде, бөгөн кисәгә күрше цемент заводы эшселәре, беҙҙең кеүек һәр яҡтан йыйылған егеттәр ҙә килә. Берәйһе менән танышып та алырһың, бәлки... - тине ул.

-Бындай ер аяғы-ер башындағы ҡалала танышырлыҡ башҡорт егеттәре лә юҡтыр әле, - тигән булды Зәлифә ни өсөндөр бер аҙ ҡыҙара төшөп.

-Булмаһа ни, - тип ғәжәпләнгәндәй итте Мәймүнә, - башҡорт булмаһа, башҡалар кеше түгелдер шул...

- Әллә, мин ни, яҡшылап урыҫса ла һөйләшә белмәйем бит...

Барлы-юҡлы кейемдәре араһынан үҙенә иң оҡшаған алһыу ебәк күлдәген кейеп, сөм-ҡара ҡалын сәсен икегә ярып үрҙе лә, ике яуырынбашы аша түшенә буйлатып төшөрҙө. Йолҡҡолап төҙәтеүгә лә мохтаж булмаған ҡыйылып торған ҡашлы, сөм ҡара күҙле, матур ирендәре бер аҙ бүлтәйеп торған мөләйем башҡорт ҡыҙына тағы ла һылыуланып китеү өсөн тик тейешенсә кәйеф менән бер аҙ матурыраҡ кейем дә етте...

-Сәлимә, ошолай кейенһәм, оҡшаймы? - тип ынйылай тигеҙ аҡ тештәрен йылтыратып йылмайҙы ул әхирәтенә кейенеп-яһанып бөткәс.

Сәлимә уға ғәжәпләнгән һымағыраҡ бер аҙ ҡарап торҙо ла:

- Ҡара әле, Мәймүнә, ысын хур ҡыҙы ла баһа беҙҙең Зәлифәкәй! - тип бот сапты, биле тапҡырынан тотоп, орсоҡ һымаҡ иттереп, иҙән уртаһында әхирәтен уңға-һулға өйөрөлдөрҙө. - Былай булғас, беҙгә тигән егеттәрҙе лә ҡаратып алмағайы был ҡыҙыҡай, - тип шаяртты.

-Минең һымаҡ "әбей"ҙәргә ҡарағансы, ошондай хур ҡыҙҙарына ылыға инде егеттәр, - Мәймүнә лә Сәлимәнең шаяртыуына ҡушылды.

-Ҡуйығыҙсы, ҡыҙҙар, - тигән булды Зәлифә бер аҙ ҡыҙара биреп, - кешене юҡҡа оялтаһығыҙ.

-Сираттағы эш хаҡына баштан-аяҡ кейенеп тә алһаң, бигерәк тә йәтеш булыр, - тине Сәлимә Зәлифәнең күлдәген тотҡолап.

-Әлләсе, - тигән булды Зәлифә көҙгөләге үҙенең һынына ҡарап, - ул хаҡта, ысынлап та, уйлағаным да юҡсы. Мин ни, өйгә посылка йыям да һалам, йыям да һалам...

-Рабиға апай унһыҙ ҙа бирешмәҫ, Зәлифә, кейенеп ал, - тип кәңәш итте Сәлимә етди төҫ алып. Үҙе сәс толомон киҫтереп, бер аҙ ҡала ҡыҙҙарына оҡшата биреберәк итеп кейенепяһанып та алғайны шул.

* * *

Дискотека кисәһенә егеттәр байтаҡ йыйылғайны. Ул саҡтағы модаға хас, күптәре яурынғаса төшөп торған, әммә ыҡсым итеп таралған оҙон сәсле. Барыһы ла заманса яҡшы кейенергә тырышҡан. Ҡайһылары пиджәк-галстукта, ә ҡайһы берәүҙәре күлдәк яғаларын пиджәк тышына сығарған. Дөйөм ятаҡ ҡыҙҙары зур залға, ғәҙәттәгесә, бер аҙ һуңлаңҡырап, икешәр-өсәрләп килә башланы. Матур-матур күлдәкле, сәстәрен төрлөсә үреп-тарап алған ҡыҙҙар инә башлау менән залға тәмле хушбуй еҫтәре таралды. Төрлө сәскәләр менән тулы түтәлдәй йәнләнеп, зур зал матурланып китте. Шуны ғына көткәндәй, магнитофондан "Сегодня праздник у девчат" тигән йыр яңғыраны. Быйаса стена буйында ары-бире, ишетелер-ишетелмәҫ кенә һөйләшеп торған егеттәр ҙә, хәрәкәткә килеп, берәм-һәрәм ингән ҡыҙҙарҙы тансаға саҡырып төшөрә башланы. Сәлимәне оҙон буйлы, аҡ сәсле, бите, танауы бер аҙ ҡыҙара биргән урыҫ егете мөләйем йылмайып килеп бейеүгә саҡырҙы. Төҫкә-башҡа "нисауа" ғына был егеттән еңелсә генә һиҙелгән хәмер еҫенә ҡыҙ әллә ни иғтибар итмәне, тартыныпнитеп тормаҫтан, уның менән бейеүгә төшөп тә китте. Бер аҙҙан ҡыҙҙар егеттәргә ҡарағанда күбәйә төштө. Зәлифә менән Мәймүнә стена буйында торған "артыҡ" ҡыҙҙар араһында ҡалды.

Күпмелер ваҡыт әкрен көй уйнағандан һуң, башҡа йыр башланды. Барыһын да тигеҙләргә тырышҡандай, шәберәк темптағы был йыр парлашып бейеүҙе талап итмәй ине. Барыһы ла һығыла-бөгөлә бейергә төшөп китте. Мәймүнә лә йомшаҡ билдәрен мыймылдатып, ҡулдары менән еңелсә хәрәкәттәр яһап, башҡаларға ҡушылды. Көй Зәлифәнең күңеленә ятманы. Ул ауыл клубында гармун уйнаған егеттәр һәм ауылдаш ҡыҙҙарын иҫләп, яңғыҙы стена буйында тора бирҙе. Ишектән инеүселәргә иғтибар итте. Икәүҙәр. Береһе оҙон буйлы, киң яурынлы, сөм-ҡара костюмда, аҡ күлдәк һәм галстукта. Ҡап-ҡара шырт сәсле, ҡара мыйыҡлы, утыҙ-утыҙ биш йәштәр тирәһендәге был ир-егетте Зәлифә ни өсөндөр үҙенең яҡташына - башҡорт кешеһенә оҡшатты. Янындағы шундай уҡ матур кейемдәге, тик кәүҙәгә ҡайтышыраҡ егет фонында был "яҡташ" айырыуса күрмәлекле, ниндәйҙер берәй зур начальникка оҡшаған. Зәлифә күңеленә инә һалып, "түрҙән" урын алып өлгөргән был кешене тәү ҡарауҙа ошо фабриканың директоры, йәиһә башҡа берәй хужалыр, тип фаразланы.

Унын ингәнен күреү менән залда бейеп йөрөгән ҡыҙҙар һәм егеттәр барыһы ла тертләп киткән һымаҡ тойолдо Зәлифәгә. Хәйер, ысынлап та шулай тойолған ғыналыр, сөнки, башҡалар нисек бейеп йөрөһә, шулай уҡ дауам итте. "Ағай" үткер ҡарашы менән бөтә залды етеҙ генә байҡап сыҡты, иғтибарын яңғыҙ торған Зәлифәлә бер секундҡа туҡтатҡандай булды. Унан ашыҡмай ғына, ышаныслы аҙымдар менән сәхнә ситендә магнитофон көйләп ултырған егеттең янына килде. Ҡолағына ниҙер шыбырлағас, тегеһе, тыңлаусан малайҙай, талғын көй уйнатып та ебәрҙе. Ғәҙәттә, командирҙарҙа һәм начальниктарҙа ғына була торған көр тауыш бөтә залға яңғыраны: "Танцуют все!" Барыһын да бейергә әйҙәгән был "начальник" артистарса килештереп, ҡулдарын йәйҙе. Туп-тура атлап килеп Зәлифәне бейергә саҡырҙы. Гипноз хәленә килгәндәй булған йәш ҡыҙҙың аяҡтары, гүйә, хужабикәһененең ихтыярынан тыш, уны бейергә алып төштө...

-Замир, - тине ир ҡуйы ҡара ҡаштары аҫтынан шундай уҡ сөм-ҡара күҙҙәрен көлдөрөп. - Һинең яҡташың.

Тап-таҙа урыҫ телендә бик тә ҡыйыу һөйләшкән был кешегә ни тип әйтергә лә белмәне Зәлифә.

-Башкурт кызы, не так ли? Угадал? - тип артабан дауам итте Замир, бер һүҙ ҙә өндәшмәгән ҡыҙҙың күҙҙәренә инерҙәй булып.

Зәлифә унан ҡарашын йәшерергә тырышты. Өндәшмәне.

-Угадал, - тип үҙе яуап бирҙе Замир. - Мин дә "башкурт малай" бит...

Урыҫса яңылыш әйтеп ҡуйырмын, тип тартынды, әллә ни, Зәлифә Замирға бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Тик башын аҫҡа эйеп, көй тамамланғансы уға "эйәрҙе". Замир ҙа башҡаса ныҡышып, ҡыҙҙы артыҡ борсоманы, көй бөткәс тә, әҙәпле генә итеп еңелсә баш эйҙе лә ҡыҙҙы урынына килтереп ҡуйҙы. Кеҫәһенән ниндәйҙер кескенә ҡатырға сығарып, ҡыҙға тотторҙо ла сығыу яғына ыңғайланы.

-Берәй проблемаң булһа - шылтырат. Миңә "ағай" тип өндәшһәң дә була. - тине сығып барышлай. Утлы ҡарашы менән ҡыҙҙы тағы "өтөп" алды.

"Ағай" һүҙен башҡортсалап әйткән Замир ҡыҙға тағы ла яғымлыраҡ тойолдо. Таныш булмаған был кешенең үҙенә "һин" тип өндәшеүе лә оҡшай төштө. Бик ихтыярлы, көслө зат булып тойолдо уға Замир, унын башҡорт яҡташы икәненә лә шиге ҡалманы. "Ҡалай матур ир" тип уйланы үҙенсә Зәлифә. Унынса, ысын ир-егеттәр тап ана шундайыраҡ ҡиәфәттә булырға тейеш. Хыялындағы "аҡ арғымаҡтағы принц"ты элегерәк тап ошо егет һымаҡ итеп күҙ алдына килтереп йөрөгәнгә, әллә ни, үҙенә күҙ атып йөрөгән башҡа егеттәргә ҡараманы. Мәктәптә иң сибәр ҡыҙ тигән даны таралған Зәлифәнең дуҫлашып, осрашып йөрөгән егете лә булманы, шул хыялы менән генә йәшәне. Унын өсөн көтөлмәгән һәм шул уҡ ваҡытта күптән көткән ваҡиға булды бөгөн...

Ике сикәһе уттай янды, йөрәге дөп-дөп типте Зәлифәнең. Нисек килеп инһә, шулай уҡ ышанысла баҫып сығып киткән Замирға бер һүҙ ҙә өндәшә алмай ҡалған ҡыҙ ошо минутта үҙен ҡайҙа ҡуйырға, нисек торорға белмәне. Башҡалар бейеүен дауам итте. Үҙен тансаға саҡырырға килгән икенсе бер егетте Зәлифә бөтөнләй күрмәне һәм ишетмәне, тиерлек. Хатта уға күтәрелеп тә ҡараманы. Ике сикәһен усы менән тотҡан килеш, ҡарашын аҫҡа төбәп, һәйкәл һымаҡ, баҫҡан урынында ҡатып тора бирҙе. Бер аҙ торғас, ҡапыл айныҡандай булды һәм таш баҫҡыс буйлап, үҙҙәре йәшәгән ҡатҡа йүгерә-атлай менеп китте.

Ҡыҙҙар тағы бер-ике сәғәт үткәс кенә бүлмәгә ҡайтып инде.

-Нишләп бик иртә ҡайтып киттең? - тип һораны Мәймүнә ингәс тә. - Әллә теге Замир берәй насар һүҙ әйттеме?

-Замир?.. Ҡайҙан беләһең һин уны? - тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды инде сисенеп, юрған аҫтында ятҡан Зәлифә.

-Уны кем белмәһен, - тине әхирәте. - Ҡаланың бер-нисә районына ул "баш". Официаль түгел. Әммә, ни өсөндөр, уны һәр ерҙә шулай тип ҡабул итәләр. Горком сәркәтиптәре, хатта милиция ла уны тыңлай, тиҙәр. Беҙҙең фабрика урынлашҡан район да унын ҡарамағына инә...

Ҡыҙҙар Мәймүнәне ауыҙҙарын асып тыңланы. Бер ни тиклем ваҡыттан Зәлифә әхирәтенә Замир биргән баяғы "кәртешкә"не һуҙҙы. Визит ҡағыҙында ташҡа баҫылған хәрефтәр менән ниндәйҙер бер предприятиеның "...генераль директоры Жангисханов Замир Артурович..." тип яҙылғайны. Ике телефон номеры ла күрһәтелгән.

-Замир миңә бер ниндәй ҙә насар һүҙ әйтмәне, - тине Зәлифә Мәймүнәнең баяғы биргән һорауын әле генә иҫләгәндәй. - Тик бына ошо визит карточкаһын ғына бирҙе. Берәй мохтажың булһа, шылтырат, тип әйтте. Башҡортса һөйләшмәһә лә ул башҡорт икән. Үҙе шулай тип әйтте. Минең дә башҡорт ҡыҙы икәнемде әллә ҡайҙан беләсе...

-Был ятаҡта йәшәгән ҡыҙҙарҙың күптәре Башҡортостандан икәнен барыһы ла белә. "Һин - башҡорт" тип ҡайһыһына төртөп күрһәтһәң дә, ҡапыл да хаталанырлыҡ түгел. Икенсенән, Жангисханов тигән башҡорт фамилияһын бер ҡасан да ишеткәнем юҡ. Замир ҡыҙҙар өлкәһендә бик тәжрибәле кешегә оҡшаған...

-Тәжрибәле? Ә һин ҡайҙан беләһең?

-Бында бер-ике йыл йәшәһәң, белмәгән нәмәң ҡалмаҫ. Үткән йыл да ул кеше бер ҡыҙҙың башын әйләндереп, зур эш хаҡы вәғәҙәләп алып киткәйне. Шунан бирле беҙ ул ҡыҙҙы күргәнебеҙ ҙә юҡ. Зәлифәкәйем, уға шылтыратып, артабан унын менән бәйләнеш тоторға кәңәш итмәйем. Ҡурҡам мин унан, нишләптер. Бынан дүрт-биш йыл элек уға бер сибәр генә ҡаҙаҡ ҡыҙы ла эйәреп киткән, тип һөйләйҙәр...

-Ҡуй, ҡыҙҙар, әллә ниндәй ҡурҡыныс нәмәләр һөйләшәһегеҙ, - тине мамыҡ менән күҙе тирәләрендәге буяуын һөртөп маташҡан Сәлимә. Үҙе урыҫ егете менән танышҡанына бик тә ҡәнәғәт ине буғай. Кәйефе шәп.

-Сережа - ябай эшсе, - тине. - Замир һымаҡ крутой-мрутой ҙа түгел. Иртәгә кискә киноға барабыҙ.

- Бәй, ул урыҫ та баһа... - тип ғәжәпләнде тағы Зәлифә.

- Урыҫ булһа ла, бик тә әҙәпле, культурный егет күренә. Был ер аяғы ер башында ҡайҙан башҡортто тапмаҡ кәрәк?

- Сәлимә, - тине Мәймүнә әхирәтенең янына уҡ килеп, - һинең "буласаҡ матур баланДың буласаҡ атаһы" бер аҙ төшөрөп алғайны, буғай.

-Хәҙерге заманда эсмәгән кеше бармы... Миңә ана шул "ирҙәр еҫе" оҡшай ҙа әле хатта... - Сәлимә шарҡылдап көлөп алды.

Дискотекаға бармай ҡалған Гөлбәзир, бүлмәләш ҡыҙҙарының йоҡларға бирмәүенә "бурылдай" башлағас, уларҙың һөйләшеүе шунын менән тамамланды. Урын һалып йоҡларға ятҡан һәр кемеһе үҙ уйына сумды...

**(Дауамы бар).**

*✓ Уҡытыусы һөнәрен һайламаҫ инем. Балалар менән эшләүе ныҡ ауыр. Әлеге балалар шул тиклем тәртипһеҙ. 5-6-сы синыфтарҙы ҡараһаң, ололарҙы хөрмәтләү тигән төшөнсә улар өсөн бөтөнләй ят.*

ЙӘШТӘР ҠОРО

# ҮҘЕБЕҘҘЕ ХӨРМӘТ ИТӘБЕҘ -

## туған телебеҙҙә һөйләшәбеҙ

(Башы 6-сы биттә).

**Әле үк һөнәр һайлап ҡуйғанһығыҙҙыр инде. Ләкин һорау саҡ ҡына икенсе йүнәлештә яңғырай: ниндәй һөнәрҙе һайламаҫ инегеҙ һәм ни өсөн?**

**Азалия:** Уҡытыусы һөнәрен һайламаҫ инем. Әлбиттә, ҡыҙыҡлы профессия, кешеләр менән аралашаһың, төрлө сараларҙа, конференцияларҙа, конкурстарҙа ҡатнашаһың, тәжрибә уртаҡлашып йөрөй алаһың. Ләкин балалар менән эшләүе ныҡ ауыр. Әлеге балалар шул тиклем тәртипһеҙ. 5-6-сы синыфтарҙы ҡараһаң, ололарҙы хөрмәтләү тигән төшөнсә улар өсөн бөтөнләй ят. Ата-әсәләренең ҡайҙа эшләүе менән маҡтанып, үҙҙәрен уҡытыусынан өҫтөн ҡуйыусылар ҙа бар. Шулай уҡ эшҡыуар йәки магазин директоры булмаҫ инем.

**Ғәзинур:** Мин юл хәрәкәте именлеге дәүләт инспекторы эшен һайламаҫ инем. Күптәр уны иң бай, иң аҡсалы эш тиһә лә, һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, көнө буйы, ямғырҙа ла, ҡарҙа ла, буранда ла, эҫелә лә аяҡ өҫтө автомобилдәрҙән сыҡҡан төтөн еҫен еҫкәп тора бит улар.

**Айҙар:** Мин, моғайын, хирург булмаҫ инем. Сөнки кеше ғүмере күп осраҡта миңә бәйле буласаҡ бит. Яңылыш ҡына ебәрелгән хата ла ҙур бәләгә килтереүе мөмкин. Бер-бер хәл булһа, ғүмер буйы үҙеңде ғазаплап йәшәйәсәкһең.

**Илнара:** Банкка эшкә бармаҫ инем. Мәҫәлән, кассир булып эшләй башланың икән, ти. Яуаплылыҡ ҙур. Һәм ҙур ғына сумма аҡса етмәүе асыҡлана. Уны бит һинең өҫтөңә ябасаҡтар. Яңы ғына эш башлаһаң, стажың булмаһа, ҡайҙан алып, нисек түләйһең?

**Гөлназ:** Мин бизнес өлкәһен һайламаҫ инем. Беренсенән, ул бик ҡурҡыныс өлкә. Икенсенән, унда дәғүәселек көслө. Ҡайһы бер ҙур эшҡыуарҙарҙың үҙҙәренең киң саүҙа селтәре бар һәм бизнеста эшләүе-йәшәүе бик ауыр. Унда шулай уҡ лидер булырға кәрәк.

**Һәр бала, тыуғандан алып, үҙенең был донъяла барлығын белдерергә, үҙенең тауышын ишеттерергә, үҙенә иғтибар йүнәлттерергә, үҙенең ҡиммәтен, баһаһын күрһәтергә тырыша. Халҡыбыҙҙа, бер олоно, бер кесене тыңла, тигән мәҡәл дә бар хатта. Ысынбарлыҡта, үҙ миҫалығыҙҙа, һеҙҙе шәхес итеп баһалайҙармы, әллә бары тик һеҙ ғаиләлә - бала, мәктәптә уҡыусы ғынамы?**

**Азалия:** Әлбиттә, ғаиләлә һәр ҡайһыбыҙҙы шәхес итеп күрәләр. Кемдең ниндәй һәләте, ҡеүәте барлығын тойомлап, ниндәй ярҙам кәрәклеген дә беләләр. Мине ғаиләмдә генә түгел, барлыҡ таныштарым, туғандарым, дуҫтарым, уҡытыусылар артист итеп күрә һәм ошо йүнәлештә ярҙам итәләр.

**Гөлназ:** Ғаиләлә мине лә шәхес итеп күрәләр һәм атайым менән әсәйем берәй нәмә хәл итергә кәрәк булһа, мотлаҡ минең дә фекеремде һорай, кәңәшләшә. Шулай булырға тейештер ҙә. Сөнки бала менән кәңәшләшмәй, мин әйткәнсә эшлә, тип кенә тәрбиәләһәң, ул үҙ-үҙенә бикләнә, роботҡа әйләнә. Әлбиттә, баланың шәхес булыуы уҡытыусыларҙан да тора. Улар ҙа артыҡ уҫал булмаҫҡа, балаларҙың фекерен тыңларға тейештәр.

**Ғәзинур:** Ғаиләлә өлкән бала булғас, миңә ҙур кеше тип ҡарайҙар, шәхес итеп күрәләр. Шулай уҡ һорауҙары булһа, бигерәк тә компьютерҙар өлкәһендә, кәңәшләшәләр. Техника ватылһа, ярҙам һорайҙар. Хатта әсәйемдең коллегалары ла ярҙам һорап килә. Миңә ышаналар икән, тимәк, уларҙың ышанысын аҡларға кәрәк.

**Илнара:** Барыһы ла минең медицина өлкәһендә эшләүемде теләй һәм был үҙе үк ҙур стимул, этәргес булып тора. Уларҙың хуплауын ишеткәс, тағы ла нығыраҡ тырышам, шәхес булыу шунда ла сағылалыр, тип уйлайым - кемдер һиңә ышана һәм һин унының ышанысын аҡларға тырышаһың.

**Айҙар:** Әлбиттә, ғаиләлә кәңәшләшәләр, фекеремде белешләр. Мин полиция хеҙмәтенә барырға ниәтләнгәс, хатта бер аҙ шөрләп тә торалар. Быны, әлбиттә, "Шаяниум"да ҡатнашыусы булараҡ, сираттағы шаяртыу тип ҡабул итегеҙ. Ә Рәсәйҙең хоҡуҡ һағында тороу юлын һайларға ниәтләнгән кешегә шәхес итеп ҡарамау, уға ышанмау мөмкин түгел.

Шундай әйтем бар: "Күңеленә нимә яҡын - шуны эшлә, ниндәй эш башҡараһың - шуны ярат". Әлбиттә, уҡыу еңел эш түгел, бәлки, уны яратыу ҙа мөмкин түгелдер. Әммә кеше ғүмер буйы камиллашырға һәм ғүмер буйы белемен арттырырға тейеш...

**Илнара:** Тормош бит бер урында тормай, алға бара. Шуға, кем менән һөйләшкәндә лә унаң кимәлендә булырға тейешһең. Мин, мәҫәлән, белемле, уҡымышлы кешеләр менән аралашырға яратам. Сөнки уларҙан күп мәғлүмәт ишетәһең, күпкә өйрәнәһең. Шулай уҡ ҙур белемгә эйә булһам, башҡалар ҙа миңә тартыласаҡ, тип уйлайым. Йүнһеҙ, аҡылһыҙ, белемһеҙ кеше менән һөйләшке лә килмәй, уйлап ҡараһаң...

**Гүзәл:** Мин белем алыуҙы, камиллашыуҙы юғары белем алыу менән генә сикләмәҫ инем. Минеңсә, төрлө китаптар уҡып та мәғлүмәтле булып була.

**Гөлназ:** Кеше һәр саҡ белем алырға ынтылырға тейеш. Мейеңде яңы мәғлүмәт менән тултырмаһаң, ул уйланыуҙан туҡтай. Хәҙер бит хатта өйҙән сыҡмай ғына, интернет аша ла күп нәмә белергә, күп нәмәгә өйрәнергә, әллә күпме белем алырға була. Белем алыу өсөн барлыҡ шарттар бар.

**Азалия:** Кеше ғүмер буйына уҡый, белем ала, камиллаша һәм "Уф, арыным, башҡаса уҡығым килмәй, иртәгәнән башлап уҡымайым", тигән кеше лә юҡтыр ул. Сөнки тормошта төрлө хәлдәргә тарыйһың һәм уларҙы хәл итеү юлдарын табырға кәрәк. Шундай һынауҙарҙы үтә-үтә кеше һабаҡ ала, тәжрибә туплай.

**Ғәзинур:** Хәҙер яңынан-яңы заманса технологиялар барлыҡҡа килә. Улар менән ҡулланыу, заман менән бергә атлау өсөн дә белем кәрәк. Белемең булһа, яңы технологияларҙы үҙләштереү ваҡыты ла ҡыҫҡарасаҡ.

**Азалия:** Ҡасандыр Ленин бабай менән Аҡмулланың халыҡты, башҡорттарҙы уҡырға саҡырыуын берәү ҙә ғәмәлдән сығармаған бит әле. Уларҙың әйткәне бөгөн дә көнүҙәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, мәктәп уҡыусылары менән әңгәмәләшкәндә ғәҙәти "Кем булырға йыйынаһың?", "БДИ-ға нисек әҙерләнәһең?", "Мәктәбең, уҡытыусыларың оҡшаймы?" тигән һорауҙар ҙа бирергә мөмкин булыр ине. Әммә бөгөнгө ҡорҙоң төп маҡсаты - баш ҡалала тыуған икенсе-өсөнсө быуын башҡорт балаларының аңфекерләү кимәлен асыҡлау, уларҙың маҡсаттарын билдәләү булды. Сөнки улар - үҙҙәренең белем усағының лидерҙары, унаң йөҙөн күрһәтеүсе уҡыусылары. Юҡҡа ғына боронғо һинд мәҡәле: "Аңыңды буйһондороп, тотош донъяны буйһондорорға мөмкин", - тимәгән. Бары тик беҙгә, өлкәндәргә, юлдан саҡ ҡына ситкәрәк китеп, йәштәргә юл биреүҙе үҙебеҙ өсөн түбәнселек тип ҡарамаҫҡа, уларға ышанырға, киләсәк дилбегәһен уларҙың ҡулына тотторорға ғына кәрәк.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# МИЛЛӘТТЕ ҺАҠЛАУ ӨСӨН...

## тәрбиәне һәм мәғарифты үҙ ҡулыбыҙға алайыҡ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Артур БИКБИРҘИН, табиб-хирург, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы:** Мин күп милләт вәкилдәре йәшәгән мөхиттә йәшәйем. Һөнәрем буйынса табип булғанға ғына түгел, ә халҡыбыҙҙың тарихын, бөгөнгөһөн үҙ аллы өйрәнеп, үҙемсә һығымталар яһай йөрөгәнгәлер ҙә, төшөнкө уйҙарға бирелгән әңгәмәселәремдең күңеленә өмөт осҡондары һалып, үҙ-үҙҙәренә ышаныс уятырға тырышам. Ошо йүнәлештәге эҙләнеүҙәремдең бер сағылышы - бөгөнгө һүҙем.

Халҡыбыҙ донъялағы бар тереклеккә хас маҡсаттар менән йәшәй һәм был тәбиғи ҙә. Хәҙерге көндә матди йәһәттән хәлебеҙ яҡшырҙы. Имен-һау, етеш донъя көтөр өсөн тоторoҡло аҡса табыу талап ителә. Хәҙерге заман шарттары дәүләттәргә генә түгел, ә Рәсәйҙең һәр гражданына донъя баҙарында ҡатнашыу мөмкинлеге бирә. Һин дә үҙ көсөңдө глобаль киңлектәрҙә һынап ҡарай, тауарыңды донъяның теләһә ҡайһы мөйөшөнә һатып ебәрә алаһың. Кешенең аралашыу, донъяны күҙ алдына килтереү ысулдары ла үҙгәрҙе. Яңы форсаттар, мөмкинлектәр офоғо асылыуы 90-сы йылдарҙа төшөнкөлөккә бирелгәндәрҙең күңелендә яҡты киләсәккә өмөт барлыҡҡа килтерҙе. Килем алыу ысулдарының шаҡтай киң булыуы арҡаһында уйлай белеүселәр "дилбегәне" үҙ ҡулына ала башланы. Заманса технологияларҙы ҡулланғанда матди хәлде генә түгел, халҡыбыҙҙың хәлен дә яҡшыртыу юлдарын табырға була икәнлекте күп милләттәштәр аңлай хәҙер.

Шулай ҙа милләтте һаҡлау мәсьәләһе көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булыуҙан туҡтамай. Халҡыбыҙ киләсәген хәстәрләүҙең беренсе юлы - киләсәк быуынға яҡшы тәрбиә биреүгә бәйле икәнлеген барыһы ла таный, әммә күптәр быға артыҡ әһәмиәт биреп еткермәй, минеңсә. Ни өсөн? Миҫал килтерәйек. Граждандар һуғышы ваҡытында етемдәрҙең күбәйеүе арҡаһында дәүләт балаларҙы тәрбиәләүҙе үҙ ҡарамағына алды. Был, үҙ сиратында, быуындар араһындағы рухи бәйләнеш сылбырының өҙөлөп ҡалыуына килтерҙе. Бөгөн дә шул уҡ хәл күҙәтелә, әммә хәҙер етемдәр генә түгел, ә етем булмағандар ҙа автоматик рәүештә дәүләт тәрбиәһе ҡарамағына тапшырыла. Ошо ерлектә ҡайһы бер мәғлүмәт саралары аша әүҙем пропагандаланған кире күренештәр йәштәрҙең халҡыбыҙҙың әхлаҡ нормаларынан ситләшеүенә килтерҙе. Быға өҫтәп, мәғариф өлкәһенә яңыса белем биреү программалары, яңы стандарттар индерелеүе, ул стандарттарҙың донъяның дөйөм картинаһын бөтөн килеш күрһәтеү урынына, киҫәктәргә бүлегеләп күрһәтеүе уҡыусының донъя бөтөнлөгөн икенсе төрлө аңлауына алып килде, өлкән быуынға ҡарата ҡаршы фекер тыуҙырҙы һәм үҙ-аллы фекер йөрөтөү ҡеүәһен аҙайтты. Балаларҙы тәрбиәләү эшен дәүләт ҡарамағынан кире ата-әсә, ғаилә ҡарамағына ҡайтарырға кәрәктер, бәлки, тигән һығымтаға киләм. Сөнки тәрбиә иң тәүҙә һөйөү, туғанлыҡ хистәренә нигеҙләнергә тейеш... Әхлаҡи яҡтан һау, белемле балалар тәрбиәләһәк, киләсәктә башҡорт мөхите киң эрудициялы, белемле һәм рухлы кешеләр менән тулыланыр, ә ундай кешеләр халҡыбыҙҙы бар донъяға танытыр ине. Ә балаларға ниндәй тәрбиә бирергә, тиһегеҙме? Иң тәүҙә ата-бабаларыбыҙҙың был яҡтарҙа бик борондан йәшәүен, эпостарыбыҙҙың быға асыҡ дәлил булыуын еткерергә кәрәк. Артабан милләтебеҙҙең айырылғыһыҙ атрибуттарын һанап үтергә мөмкин. Халыҡ булып формалашыуыбыҙҙың ныҡлы дәлилдәргә нигеҙләнгән булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып аңлатыу ҙа кәрәк. Ҡыҫҡаһы, баланы ғаиләлә үк халҡыбыҙ тарихына, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә ыңғай, ҡыҙыҡһыныусан ҡараш тәрбиәләп үҫтерергә кәрәк.

Халҡыбыҙҙың ауыр яҙмышын бер аҙ еңеләйтәйем, тигән ынтылыш бөтә булмышымды хәрәкәткә килтерә. Ошо көстө дөрөҫ файҙаланып, рухи үҫешкә йүнәлткәндә, халҡыбыҙҙың тарихын нисек бар, шул көйө бөгөнгө быуынға еткереү механизмын көйләгәндә һәм, әлбитә, милли матбуғат мөмкинлектәрен дөрөҫ файҙаланғанда, кәртәләрҙе хис менән генә түгел, ә һалҡын аҡыл менән хәл итергә өйрәнгәндә, халҡыбыҙҙың үҫеп килгән үҙаңы бер мәл шундай булып күтәреләсәк - уны бер ниндәй иҡтисади, мәғлүмәти һәм матди ҡаршылыҡтар тотҡарлай алмаясаҡ.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*✓ Сит илде тәүге тапҡыр күреүем. Тирә-яҡ тик тау ҙа таш, бөтә донъя ҡара-һоро. Эй, үҙебеҙҙең гүзәл Башҡортостаныбыҙ мәңге йәшәһен, тип теләйем эстән генә. Ожмахтың үҙендә йәшәйбеҙ икән!*



*ИНТЕРНЕТТАН*



## КҮНЕКМӘЛӘРҘЕҢ... файҙаһы бармы?

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһөҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки быдың сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй тәьҫир итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калориялар йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң ябай һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

■ Американың Nutrion Impact компанияһы тикшеренеүселәре авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Ғалимдар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә сәләмәтлеккә авокадоның йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Яуап биреүселәрҙең сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә "яҡшы" холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм - ҡара, ҡайһылары аҡ шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ҡулланырға ярамай, тип иҫкәртә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ Американың Атланта ҡалаһында йәшәүсе 24 йәшлек Роб Райнхарт исемле программист ашарға әҙерләү һәм уны ашауға киткән энергияны бушҡа сарыф итеүҙән һаҡланыу маҡсатында яңы ризыҡ төрө уйлап тапҡан. Был коктейлдә организм өсөн кәрәкле бөтөн витаминдар һәм минералдар бар. Райнхарт раҫлауынса, эсемлектең тәме яҡшы һәм әлегә алты аҙна эсендә ул уны бер ҙә ялҡытмаған. Шул уҡ ваҡытта, туҡланыу өсөн кәрәкле булған бар элементтар булыуға ҡарамаҫтан, коктейлдә калориялар өс тапҡырға аҙыраҡ. Зәйтүн майы, балыҡ майы, пробиотиктар, антиоксиданттар, олигосахаридтар нигеҙендә яһалған был эсемлек шәкәр һәм фруктозаға ҡарағанда оҙағыраҡ үҙләштерелә. Иң ҡыҙығы, туҡланыуҙың бындай варианты йәш кешегә көнөнә бер нисә сәғәтте һәм айына бер нисә долларҙы һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә икән. Элек ул аҙыҡ-түлек һатып алыу өсөн - 220, ә ашханаларҙа ашау өсөн 250 доллар тотонһа, хәҙер был сығымдар айына 50 долларҙан артмай.

*ҺАБАҠТАР*

# ҠОЯШ КЕҮЕК БУЛАЙЫҠ!

**Рус әҙәбиәтенең Көмөш быуаты шағиры Константин Бальмонттың "Ҡояш кеүек булайыҡ" тигән һүҙҙәре ғүмер йомғағын һүткәндә әленән-әле хәтергә төшөп тора. Бәлки, күптән онотолоп та бөткән булыр ине, әммә юлымда осраған кешеләрҙең ҡайһы берҙәре шунда уҡ үҙенең яҡтылығы, йылылығы менән арбай, күңелеңде иретерлек итеп йылмайып, барлыҡ шик-шөбһәләреңде юҡҡа сығара, үҙең дә һиҙмәҫтән, Ер йөҙөндәге бер генә бәндәне лә насар-яҡшыға, яман-матурға, белемле-белемһеҙгә айырмай тиң күреп яратҡан был кешеләрҙе Ҡояш кеүек итеп күҙаллай башлайһың һәм эсеңдән генә "Ҡояш кеүек булайыҡ" тип ҡабатлайһың. Мәсетле районының Яңы Мишәр ауылында йәшәүсе Флүрә Кинйәбай ҡыҙы Зиннурованы ла Ерҙәге ҡояш була белгән ағинәйҙәр рәтенә индерергә мөмкин. Һүҙҙе оҙонға һуҙмай, әйҙәгеҙ, уның үҙен тыңлайыҡ.**



### Ҡан хәтере уянғанда

Мин дә һуғыш йылдары балаһы. Оло афәт осоронда ас-яланғас үҫһәк тә, тормошома рәхмәтлемен һәм бәхетлемен. Атайым граждандар, фин һуғыштарында һәм башынан аҙағына тиклем Бөйөк Ватан һуғышында йөрөп, Германияға тиклем барып етеп, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеп, иҫән-имен әйләнеп ҡайтҡан. Атайым һуғышҡа алынғанда иң кесебеҙ ни бары өс айлыҡ ҡына булған. Өс йауҙы үтеп ҡайтҡан атайыбыҙ тыныс тормошта ғына оҙаҡ йәшәй алманы. 1938 йылда 1 мең хеҙмәт көнө эшләп, Мәскәүгә барыу хоҡуғын алған әсәйем Ғәкилә бөтөн тыл ҡатын-ҡыҙҙары күргәнде күреп, көнө-төнө Һүлейә станцияһынан ике ат менән кәрәсин ташып, колхозға 11 йыл рәттән турпыша һуғып, кәбән һалып, көнөнә бер ҡалаҡ он өсөн бер гектар бесән сабып, биш балаһын да аяҡҡа баҫтырҙы. Бөгөн өсәүебеҙ иҫән.

Нәҫелебеҙ элек-электән ауылдың иң уҡымышлыһы һанала. Әбдүлнафиҡ ҡартатайым мәзин булған. Заманында Троицкиҙа Зәйнулла ишан хәҙрәттәренән һабаҡ алған, күрәҙәселек иткән. Байҙарҙы, дин әһелдәрен Себер тарафтарына һөргөнгә ебәреү йылдарында ауыл халҡы күтәрелеп сығып, уны төрмәнән алып ҡалған. Ҡан хәтеренең уяныуымы икән, әлеге ваҡытта үҙемде тулыһынса дингә арнаным. Үҙ аллы ғәрәп телен өйрәнеп, хәҙер инде Ҡөрьәнде төп нөсхәһендә уҡыйым. Оҙаҡ йылдар ауылыбыҙҙа мәсет булмау сәбәпле, ауылдаштарҙы йыйып, төрлө дини байрамдарҙы өйөбөҙҙә үткәрә инек. Хәҙер, Аллаһҡа шөкөр, ауылыбыҙҙа Аллаһ йорто ла бар. Дини байрамдарыбыҙҙы ауылдаштарыбыҙ менән шунда атҡарабыҙ. Ғәҙәттә, кешеләр, ярай, хаҡлы ялға сыҡҡас, рәхәтләнеп ял итермен әле, ти. Ә минең хаҡлы ялда булһам да, ял итергә, тик ултырырға ваҡытым юҡ. Көнөнә биш намаҙҙы ҡалдырмайым. Тәсбих әйтеү, дини китаптар уҡыу, ауыл ҡатын-ҡыҙҙарын намаҙ уҡырға өйрәтеү, мәсеткә йөрөү, дини байрамдар ойоштороу, ауыл кешеләрен, йәшен-ҡартын дингә ылыҡтырыу менән мәшғүлмен. Шул уҡ ваҡытта заман менән бергә атларға, китаптар, гәзит-журналдар алдырып, төрлө ваҡиғалар буйынса ла хәбәрҙар булырға тырышам. Балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем ҡайтып, ихатам уларҙың шат тауыштарына күмелгәндә, тағы бер яуаплы вазифаны лайыҡлы атҡарырға тырышам - ул ваҡытта мин бәхетле әсәй һәм өләсәй!

### Сәфәр сәхифәләре

Бынан йөҙ йыл элек ауылыбыҙҙағы Солтан бабайҙы (Солтанхажи) бөтә мир аҡса йыйып, хаж сәфәренә ебәргән. Ул унда бер йыл йөрөп ҡайтҡан. Тап йөҙ йылдан һуң икенсе булып хаж сәфәрен ҡылырға миңә насип булды.

...Автобус менән Мәҙинә ҡалаһына алып киттеләр. Сит илде тәүге тапҡыр күреүем. Тирә-яҡ тик тау ҙа таш, бөтә донъя ҡара-һоро. Эй, үҙебеҙҙең гүзәл Башҡортостаныбыҙ мәңге йәшәһен, тип теләйем эстән генә. Ожмахтың үҙендә йәшәйбеҙ икән! Юлыбыҙ тик тау аша бара, ара-тирә дөйәләр күренеп ҡала. Юл тип-тигеҙ, үҙе киң. Киңлеге 30 метр самаһы барҙыр. Беҙҙә ике-өс һыҙат булһа ла, юлдар бик тар икән. Заправкалар бик йыш урынлашҡан, уларҙа ыҡсым ғына мәсеттәр бар. Әгәр намаҙ ваҡыты етһә, барыһы ла машиналарынан төшөп, намаҙ уҡып ала. Автобусты туҡтатып, ашарға, эсергә таратала лар.

Мәҙинә - иҫ китмәле гүзәл ҡала. Нисек тау-таш араһында шундай мөһәбәт ҡала төҙөүҙәре аптырата ла, һоҡландыра ла. Йорттарҙың архитектураһы берберенһен ҡабатламай. Төрлө-төрлө емеш ағастары йәм-йәшел төҫтә. Һыуҙың дингеҙҙән торба менән килтереүен иҫәпкә алғанда, тау-таш араһындағы бындай йәшеллек һушты ала. Бер үк ваҡытта әллә нисә мең кеше ғибәҙәт ҡыла ала торған гүзәл Бәйғәмбәр мәсетендә булдыҡ, төрлө иҫтәлекле урындарға йөрөттөләр. Ер йөҙөндә ул берәү генә булған ике ҡиблалы мәсеткә алып барҙылар. Сәхәбәләр зыяратына зыярат ҡылдыҡ.

Мәҙинәлә 3 көн торғас, ихрамға инеп, Мәккәгә юлландыҡ. Мәккәлә әл-Хәрәм мәсете иң ҙур һәм гүзәл мәсет. Шул тиклем матур, хатта күҙҙәр ҡамаша. Мәсеттән сыҡҡы ла килмәй, ул үҙе үк һине ғибәҙәткә ылыҡтырып, тартып тора. Шул мәлдә, әйтерһең дә, йән ғаләм киңлегендә иреп, йыһан менән бер бөтөнгә әйләнә. Хаж ғәмәлдәрен ҡылып, мөҡәддәс Ҡәғбәне әйләнеп, күңел түренән сыҡҡан тәҡбир һәм тәһлил ауаздарын яңғыратып, Ислам ҡояшының беренсе нуры төшкән изге ерҙе үҙ күҙем менән күреүгә өлгәштем һәм шуның менән үтә бәхетлемен.

### Балаларым - йөрәк парәләрем

Мин биш бала әсәһемен. Хәләл ефетем Әнүәр Хәкимйән улы менән икебеҙ ҙә хеҙмәт ветераны. Балаларым үҙ аллы тормош көтәләр, беҙгә ейәндәр үҫтерәләр, сәнәғәттең төрлө тармаҡтарында эшләйҙәр. Кешеләрҙә һәр саҡ ярҙамсыллыҡ, изгелекте тәүге урынға ҡуйҙым һәм үҙем дә шундай булырға, балаларымда ла шундай уҡ сифаттар тәрбиәләргә тырыштым. Беҙҙең заманда ҡул эштәре белеү мотлаҡ һанала ине һәм шуға ла ҡыҙҙарымды бала саҡтан таҫтамал, ҡулъяулыҡ сигергә, келәм һуғырға өйрәттем. Эшләгәндән кеше үлмәй, эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн, тип тылҡыным балаларыма. Үҙем сиккән-ҡайыған таҫтамалдар, бәйләгән селтәр-эскәтерҙәр, башҡа кәрәк-яраҡтар әле лә йортобоҙҙо биҙәп тора. Һаман да, һирәк-һаяҡ булһа ла, әсәйемдән ҡалған станокта үҙем келәм һуғам. Бәхетле, мөхәббәтле, динле ғаиләлә генә тәртипле балалар үҫә. Шуға ла балаларыма гелән, сабыр йөрәкле булығыҙ, балаларҙы тик һөйөп, яратып үҫтерегеҙ, атай-әсәй үҙе өлгө булырға тейеш, тип тылҡып торам. Балаларға иғтибар бүлегеҙ, улар менән асыҡтан-асыҡ һөйләшегеҙ, ваҡытым юҡ, тип баланың мөрәжәғәтен иғтибарһыҙ ҡалдырмағыҙ, тип өйрәтәм. Сөнки иң яҡшы кәңәште, тура һүҙҙе ата-әсә генә әйтә. Шулай уҡ тәрбиә сараһының быуаттар буйына раҫланған, үҙен аҡлаған ысулы тип хеҙмәт тәрбиәһен һанайым һәм элек үҙ балаларым ошо тәрбиә мәктәбен үтһә, хәҙер инде ейән-ейәнсәрҙәремә һеңдерәм ул һабаҡтарҙы. Азамат ейәнемдең дин юлын һайлап, дүрт йыл инде намаҙҙа булыуына ла Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтлемен. Аллаһы бойорһа, ҡалғандары ла яйлап дингә ылығырына өмөтләнәм. Сөнки фани донъя рәхәтлектәренән тыш, баҡыйлыҡта бөтә ҡылған эштәребеҙгә хисап бирәсәгебеҙҙе иҫтән сығармайыҡ. Шул уҡ ваҡытта барлыҡ халҡыбыҙға: "Динебеҙҙе һаҡлайыҡ, боҙоҡлоҡтарҙан йыраҡ булып, һәр ваҡыт изгелектәр ҡылып, сауаплы ғәмәлдәр эшләйек. Ислам дине телебеҙҙе, башҡорт милләтен һаҡлауҙа ярҙам итәсәк", - тип мөрәжәғәт иткем килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иманлы кеше нурлы була, тиҙәр. Бәлки, шуғалыр ҙа, улар ҡояш кеүек һәр кемгә нурын йәлләмәй тарата, нисәмә йылдар ҡатҡан, туңған күңелдәрҙе иретергә тырыша. Бары тик ошо нур инһен өсөн күңелдәребеҙҙе, йөрәгебеҙҙе генә асырға кәрәк - беҙ ҙә ошо ҡояштың бер нурына әүереләсәкбеҙ. Әйҙәгеҙ, ҡояш кеүек булайыҡ...**

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

ШУНДАЙ ТӘҠДИМ БАР!

# АУЫЛДАРҘЫҢ ИСЕМЕН БАРЛАЙЫҠ

**Ер-һыу атамаларын башҡорт һәм урыҫ телендә хаталы ҡулланыуҙар тураһында гәзит-журнал биттәрендә даими яҙылып тора. Был йәһәттән үҙем туплаған миҫалдар ҙа бик күп, улар башлыса ауылдар исемдәренә ҡағыла.**

Һуңғыһы Шишмә районына ҡараған, заманында мишәрҙәр нигеҙ һалған Сыуалкип (урыҫса Чувалкипово) ауылы исеменә "һөрләгәп" киттем. Баҡтиһәң, ауыл борон СыуалкиН (ЧувалкиНово) атамалы булған икән, урыны ла Сыуалкин йылғаһы ярында. Фаразлауым буйынса, "һыуы һалҡын - сыуы салкин" йәки чыуы чалкин" тигәнде аңлаталыр, "һыу алыу урыны - сыу алкин" булыуы ла ихтимал. Сыуалкин исеме менән ауыл һуңғы тапҡыр 1926 йылғы рәсми исемлектә яҙылған, ә инде 1940 йылдан хәҙерге атамаһы менән йөрөй. Бәлки, шул дәүерҙә башҡорт теленең латин яҙмаһынан кирилл яҙмаһына күсеү касафатылыр, латиндың "n" хәрефе менән кирилса "п" хәрефе оҡшаш бит. Бер генә хәрефтә айырма, ә күпме мәғәнә юғалған. Әммә бөгөн һүҙемдә был ауыл хаҡында ғына түгел, ә бөтә ер-һыу атамалары буйынса әйткем килә.

Минең уйымса, булған хаталар тураһында яҙып ҡына ҡалмаҫҡа ине. Мәғлүмәтте бер урында туплау, ниндәйҙер кимәлдә дәлилләп ҡуйыу һәм республиканың терминология комиссияһы аша раҫлатыу зарур. Айырым осраҡта урыҫ телендәге исемгә лә аныҡлыҡ индереп, Рәсәй Федерацияһы хөкүмәте ҡарары менән раҫларға кәрәк. Әйтәйек, Ҡыйғы районының Дүшәмбикә ауылын урыҫ телендә "н" хәрефе аша яҙып, Душанбеково итеп күпме йөрөтөргә була?

Әлбиттә, ауыл исемдәре башҡортса һуңғы тапҡыр "Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль төҙөлөшө" исемле рәсми белешмә китабында баҫтырылғайны (2007). Әммә унда ла ҡайһы бер хаталар осрай. Сөнки китап баҫмаға бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡабаланып әҙерләнде. 2002 йылда нәшер ителгән "Башҡортостан Республикаһының топонимдар исемлеге" һүҙлегендә лә хаталарҙы күрергә була. Тимәк, ер-һыу атамаларын даими барлап, тикшереп торорға һәм асыҡларға кәрәк. Был эшкә белгестәр генә түгел, ә барлыҡ йәмәғәтселек ҡушылһа, эш ырамлы һәм нәтижәле булыр. Белгестәр һәр төбәктең үҙенсәлеген белеп бөтмәй, шуға күрә хата өҫтөнә хата өҫтәлеүе мөмкин. "Мәсетле районының Һөләймән ауылы Сөләймән булырға тейеш тә ул", тип, миңә әллә нисә тел белгесе әйткәне бар. Әммә ләкин ул ауыл борон-борондан Һөләймән исемле. Әйткәндәй, Башҡортостанда ес Сөләймән һәм ике Һөләймән ауылы бар. Ҡайһы бер белгестәр "Бишеһе лә бер төрлө булыға тейеш", тигән фекер әйтә, ә мин улар менән килешә алмайым. Быуа шундай хата-тәҡдимдәрҙе ҡабатламаҫ өсөн кешеләр үҙ ауылдарының исемен аңлатып бирһә, ауыл тарихын, уның тирәһендәге мөхитте тасуирлап яҙһа, булған яҙма сығанаҡтарҙы күрһәтһә, белгестәр өсөн дә, ябай уҡыусы өсөн дә бихисап кәрәкле мәғлүмәт тупланыр, башҡорт теле байлығы тергеҙелер ине.

Башҡорт халҡы өсөн мөһим булған был изге эште атҡарып сығыу өсөн Википедияның башҡорт теле бүлеге ҡулайлы урын, тип уйлайым. Унда Башҡортостандың һәр ауылы һәм һәр йылғаһы тураһында мәҡәлә бар, уларҙың күбеһе әлегә башланғыс хәлендә. Быуа шунда кәрәкле мәғлүмәтте яҙып, һәр мәҡәләнең махсус "Фекер алышыу" урынында өҫтәмә аңлатма бирергә була. Әлегә ваҡытта уҡ ҡайһы бер мәҡәләлә ауылдың тирә-яҡ мөхите тураһында күләмле һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар. Әммә улар әлегә бик аҙ. Йәмәғәт, әйҙәгеҙ, ҡумәкләп Башҡорт Википедияһында http://ba.wikipedia.org/ ауылдарыбыҙ, йылғаларыбыҙ, гөмүмән, аҫаба еребеҙҙең ер-һыу атамаларындағы ысынбарлыҡты теркәйек, тарихи сығанаҡтар менән нығытайыҡ. Ундай мәғлүмәт киләсәк быуындар өсөн бик мөһим.

**Рөстәм НУРЫЕВ,**
**Башҡорт Википедияһы ирекмәне.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК КАРТЛАС

## Үлгәндән һуң ҡайтыу

Теманы раҫлағандан һуң Валерий Семенович диссертация өҫтөндә эшләүҙең ҡәтғи графигын тәҡдим итте. "Бер йылдан һуң һеҙ өҫтәлгә эшегеҙҙең беренсе вариантын килтереп һалырға тейешһегеҙ", - тине ул һәм датаны атаны. Ошо көндө һанамағанда, 371 көн. "Эшләнгән эшегеҙ хаҡында беренсе отчетығыҙҙы декабрҙә, кафедра ултырышында ишетербеҙ, - тип өҫтәне Валерий Семенович. - Һеҙҙең тулы ярты йылығыҙ бар".

Һөйләшеү июнь башында булды. Мин, ошо айҙа уҙғарасаҡ бер нисә консультацияны һәм имтиханды иҫәпкә алмағанда, тулыһынса тиерлек азат инем. Был мәлгә ваҡытты "ауыҙлыҡлағайным" инде: ул мине тормош дарьяһында йомшаҡ һәм һәлмәк кенә алып бара ине. Мин бер ҡайҙа ла һуңламаным, педагогика кафедраһы уҡытыусыһы бурыстарын еңел генә башҡарҙым. Ғәҙәткә ингән көн режимына артыҡ үҙгәрештәр индерергә тура килмәне: бары тик эшмәкәрлегемдең ҡайһы бер төрҙәрен генә алмаштырҙым. Июлдә, отпускылар башланыу менән, шундай график төҙөнөм: 10.00 -12.30 һәм 15.00-18.00 сәғәттәрҙә - республика китапханаһында эшләү, тәүлектең ҡалған өлөшөн әлекке график буйынса йәшәү. Өҫ йыл дауамында минең өсөн төшкө һәм киске ашты тормош иптәшем Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы һәм балаларым Әнисә менән Ғайсар әҙерләне. Иртәнге ашты үҙем әҙерләнем, сөнки барыһынан да иртәрәк тороп, етенсе яртыла ашнаҡсы бурыстарын башҡарыуға тотондом.

Үлем темаһы мине тулыһынса ялмап алды. Китапханала бер аҙнаға өҫ-дүрт китап алып, һайланған тема буйынса кәрәкле урындарын күсереп өлгөрҙөм. Эшемдә "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында эшләгән йылдарымда туплаған оҫталыҡ ныҡ ярҙам итте. Унда хеҙмәткәрҙәр миңә бик ярҙам итеп барманы, сөнки яңы баш мөхәррир Мансур Әнүәр улы Әйүпов кешеһе тип иҫәпләнә. Мин был кешегә һәр саҡ рәхмәтле буласаҡмын - ауыр характерлы булһа ла, намыҫлы һәм ихлас булды ул. Тап Мансур Әнүәр улы миңә Сибайҙан Өфөгә күсенеп килергә, фән донъяһына инергә ярҙам итте. Ул гелән: "Ун мәҡәләгә етерлек материал йый, ләкин бер генә материал яҙ. Ҡалғандарын сүп биҙрәһенә ташла", - тип ҡабатлар ине.

...Бер нисә йылға мин тулыһынса үлем донъяһына сумдым. Тырышыуҙарым бушҡа булманы, Үлем үҙе минең саҡырыуыма яуап бирҙе. Бер ваҡыт иртән, барыһы ла йоҡлағанда, йыуыныу бүлмәһендә ҡыштырлау ишеттем. Бәләкәй генә бүлмәгә индем дә тынып ҡалдым. Ҡыштырлау тағы ҡабатланды. Тауыштар вентиляция тишегенән килә ине. Ҡарашымды өҫкә күсереп, унан бер нисә ҡауырһын һәм бер нисә һалам бөртөгө күренеп торғанын күрҙем. Күрәһең, күгәрсен вентиляция шахтаһына ҡолап төшкән дә, шунда тығылған. Йыуыныу бүлмәһенән сығып, ҡабат иртәнге аш әҙерләргә тотондом. "Эштән ҡайтҡансы күгәрсен шахтанан сығыр", - тип уйланым. Ул ваҡытта биш ҡатлы йорттоң дүртенсе ҡатында йәшәй инек, шуға быйың шулай булырына тулыһынса ышандым.

Кискеһен, биштәр тирәһендә ҡайтып, ашарға ултырҙым. Йыуыныу бүлмәһенән тағы ла ҡыштырлау ишетелә. Улымды һәм кейәүемде саҡырып, бахыр ҡошто нишләтергә, тип кәңәшләшеп алдыҡ. Улар мәсьәләне ябай ғына хәл итергә тәҡдим итте: шампур алырға ла, ҡошто үтәнән-үтә сәнсергә. Мин ризалашманым: "Һеҙ нимә! Йыуыныу бүлмәһендә ниндәй еҫ торасаҡ". Уларға ҡасау һәм сүкеш алып, вентиляция рәшәткәһен аҡтарып алырға ҡуштым. Егеттәр эш башланы, ә мин залға сыҡтым. Күпмелер ваҡыттан һуң йыуыныу бүлмәһенән шау-шыу ишетелде. Килһәм, егеттәр аптырашып тора: "Ул беҙҙе яҡын да ебәрмәй, суҡыша". Тишеккә ҡарайым һәм унда күгәрсен түгел, йәш ҡарға ултырғанын күрәм. Ул ике аяғы менән дә тишектең ситтәренә ныҡ итеп йәбешкән һәм үҙенең мәрйен күҙҙәре менән миңә нәфрәтләнеп ҡарап, башын икенсе яҡҡа бороп уҡ ҡуйҙы. Мин ышаныслы ҡарарға килеп, ултырғысҡа менеп баҫтым, ҡошто аяғынан ныҡ итеп эләктерҙем һәм балконға алып сыҡтым. Ҡош мин уны тотҡанда ғына ҡулымды бер тапҡыр суҡып өлгөрҙө, һуңынан тик кенә ултырҙы. Балконға сыҡҡас, ҡулдарымды яҙып ебәрҙем. Ҡарға көнсығышҡа ҡарай 20 метрҙар самаһы осто ла, башын минең яҡҡа борҙо. Күҙҙәребеҙ осрашты - уның ҡарашында мин өҫтөнлөк һәм нәфрәт күрҙем.

Ул ваҡытта мин беренсе тапҡыр Үлем илсеһе менән осрашыуымды аңламаным да. Бер ай үткәс, әсәйемдән хат алғас ҡына аңланым. Ул: "Улым, һинең шундай зирәк булыуыңа ҡыуанам. Ҡошто бер ваҡытта ла, бер ниндәй һылтау менән дә үлтерергә ярамай ине. Белеп ҡуй, ул ябай ҡош булмаған. Һиңә ҡасандыр осрашасаҡ үлемең килгән булған. Аҡыллы аҙымың менән һин уның менән осрашыуҙы кисектергәнһең". Был әсәйемдән ҡарға менән булған эпизодты ла һүрәтләгән хатыма яуабы ине.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

105. Уның тураһында кире фекер киң таралһа ла, стресс ундай уҡ насар нәмә түгел. Ул организмға стресс ваҡытында бүленгән химик матдәләр ярҙамында экстремаль шарттарҙа үҙ-үҙебеҙҙе нисек тоторға ярҙам итә. Стрестың күплеге генә зыянлы булыуы мөмкин. Дөрөҫөрәге, стрестан һуң ялдың булмауы. Сәләмәтлеккә һәм эш һөҙөмтәлелеген һаҡлап ҡалыу өсөн стресс осоро тулыһынса көсөргәнештән арыныу һәм ял осоро менән тигеҙ аралашып барырға тейеш. Замандың күп кенә лидерҙары юғары вазифаларҙа, ҙур яуаплылыҡ алып һәм көсөргәнешле режимда эшләй. Әммә улар стрестан көсөргәнеште ял итеү менән аралаштырып алып барыуҙың көйләнгән стратегияһы, күңелгә яҡкан шөғөл һәм тыныс тормош ярҙамында үҙҙәрен һаҡлай.

Кеннеди Аҡ йортта эш бүлмәһендә бер аҙ серем итеп алырға яратҡан. Черчилль төшкө аштан һуң мотлаҡ бер сәғәт йоҡлап алған. Был уға иғтибар тупларға һәм тыныс булырға ярҙам иткән. Шулай уҡ сәләмәтлекте һаҡлап ҡалыу өсөн физик йәһәттән генә түгел, аңды ла көсөргәнештән арындырыу зарур. Йыш ҡына кешеләр күп энергия талап иткән физик күнегеүҙәр, дөрөҫ туҡланыу һәм матур ял барлыҡ яуыҙлыҡтан ҡотҡарасаҡ, тип уйлай. Ысын бәхетле һәм оҙон ғүмерле булыу өсөн был сараларҙы ыңғай фекерләү һәм күңел тыныслығы менән аралаштырырға кәрәк.

106. Ял көйөк үк, урын-ерҙе алмаштырыу ҙа файҙалы. Ул эш алыштырыу көйөк әһәмиәтле йәки аҙнаһына өс тапҡыр бер сәғәт дауамында иғтибарығыҙҙы тулыһынса үҙенә алған бер тәптипкә һалынған ял да булыуы мөмкин. Көн тәртибендәге йәки аҡыл көйләнешендәге бындай үҙгәрештәр бик кәрәк. Шөғөл йәки ял һайлағанда иғтибарығыҙҙы тулыһынса йәлеп иткән нимәләр табырға тырышығыҙ. Тап шул сәбәпле күптәр хәрби сәнғәт менән шөғөлләнә башлай. Бындай күнекмәләрҙә һеҙ бер генә секундҡа ла икенсе нәмә тураһында уйлай, иғтибарығыҙҙы ситкә йүнәлтә алмайһығыҙ. Сөнки бер секунд һеҙгә ғүмерлек һабаҡ биреүе ихтимал. Ауыртыныу һәр саҡ бөйөк дөртләндереүсе, сәмләндереүсе булып тораҫаҡ.

107. Бәхеттең 10 төп нигеҙен иҫегеҙҙән сығармағыҙ:

- Һөҙөмтәле, әүҙем һәм йөкмәткеле тормош алып барығыҙ.
- Көндөң һәр минутын аңлы һәм әһәмиәтле эш менән шөғөлләнергә тырышығыҙ.
- Ойошҡан, тәртипкә һалынған тормош рәүеше алып барырға тырышығыҙ, уға илкеһалҡылыҡ индермәгеҙ.
- Аныҡ маҡсаттар ҡуйығыҙ, әммә планканы бик юғары ҡүтәрегеҙ.
